✔ *Ниндәйҙер теләгеңде тормошҡа ашырыр алдынан уйла: ошондай уҡ теләкте тормошҡа ашырған башҡалар бәхетлеме?*

*(Франсуа Ларошфуко).*


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

27 АПРЕЛЬ - 3 МАЙ (АЛАҒАРАЙ - ҺАБАНАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№17 (539)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


### Бурҙан ҡалһа ла...

ут-һыуҙан ҡалмаҫ



4-5

### Үҙең булып йәшәү өсөн...

үҙ мөхитеңдә тәрбиә ал



6,11

### Баҫҡыс ике аяҡлы була,

йәки Башҡаға ярҙам итеп кенә үҫешеү мөмкин



8-9

### Талана бит...

ата-бабалар төйәге



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Кешенең ярты ғүмере хеҙмәттә үтә. Әшегеҙ һеҙҙең өсөн аҡса сығанағы ғынамы, әллә ул күңел кинәнесе лә бирәме?

***Лиза ӘҒӘҘУЛЛИНА, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы:*** Үҙегеҙгә мәғлүм, уҡытыусының эш хаҡы, аҡса эшләйем, тип ҡыҙығырлыҡ түгел. Әлегеләр тураһында әйтмәйем, әммә беҙҙең быуын уҡытыусылары был һөнәрҙе фәҡәт йөрәге ҡушыуы буйынса, үҙен башҡа профессия кешеһе итеп күҙ алдына килтерә алмағанға күрә һайлай ине. Бәләкәйҙән уҡытыусы булырға хыялланып, шуны тормошҡа ашырып, уға ғүмер буйы тоғро булды беҙҙең быуын. Әгәр хеҙмәтем күңелемә кинәнес бирмәһә, ғүмер буйы уҡытыусы булып ҡалыр инемме? Күптән хаҡлы ялда булһам да, мәктәбемде ташлай алмайым - етәкселәрҙең үтенесен кире ҡағырға ҡыймауҙан, йә булмаһа, пенсияға ҡуш булһын, тигән уйҙан да түгел был. Хеҙмәтем, уҡытыусылыҡ - минең тормош рәүешем, яҙмышым, шунһыҙ был донъяның мәғәнәһе лә булмаҫ кеүек тойолоп китә. Аҡса өсөн булһа, өйҙә генә репетиторлыҡ менән шөғөлләнеп тә эш хаҡымдан әллә күпмегә артығыраҡ аҡса эшләй алған булыр инем, сөнки ошо йәһәттән ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүселәр бик күп, ләкин 53 йыл уҡытыусы булып эшләү дәүеремдә бер ҡасан да уҡыусынан аҡса алғаным булманы, ундай балалар менән ял көндәрендә бушлай эшләйем. Был совет осоронан ҡалған ғәҙәтем, күрәһең. Ул осорҙа ла беҙ ял, байрам көндәре менән иҫәпләшеп тормай инек. Ә бит ҡайһы берәүҙәр хәҙер уйлап та тормай уҡытыусы абруйын аҡсаға алыштыра. Уҡытыусылыҡ - ул кәсеп түгел, ә изге һөнәр. Уҡыу йылы буйына минең эш тәжрибәһе шундай: ял көнө булһа ла барыбер иртәнге сәғәт 9-ға мәктәпкә киләм. Балаларҙы олимпиадаға, Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләйем. Шуныһы эсте бошора: үҙ-үҙҙәрен аямай эшләгән уҡытыусыларҙың ҡәҙере бөттө, уҡытыусы һөнәренең абруйы ҡаҡшаны бөгөн. Сәбәп эш хаҡының аҙ булыуында ғына түгел. Уҡытыусы һөнәре дәүләт кимәлендә күтәрмәләүгә мохтаж. "Йыл уҡытыусыһы" конкурстары булып тора, әлбиттә, тик был ғына аҙ. Әйткәндәй, һуңғы 40 йыл эсендә дәүләт наградаларына лайыҡ булғандар араһында бер генә уҡытыусы ла юҡ. Элек оҙаҡ йылдар эшләгән уҡытыусыларға Ленин ордены бирелә ине. Бөгөн депутаттар араһында ла уҡытыусыларҙы күрмәйем мин. Уҡытыусы һөнәрен бик һанларға теләмәһәләр ҙә, юғарыла ултырған етәкселәребеҙгә лә бит уҡытыусы белем биргән...

**(Дауамы 2-се биттә).**

## УЙЛЫҒА - УЙ

● ***Һуңғы ике йылда Рәсәйҙә, шул иҫәптән беҙҙә, оптималләштереү һөҙөмтәһендә бик күп мәктәптәр ябылды. Шуның арҡаһында күпме уҡытыусылар эшһеҙ ҡалды, уҡыусылар күрше ауылдағы мәктәпкә йөрөү уңайһыҙлығы кисерә. Бындай ситуациялар нилектән килеп сыға? Мәктәп тулы ҡанлы булһын өсөн балалар күп тыуырға тейеш. Унан һуң, ауылда мәктәпте һаҡлап ҡалыр өсөн иң беренсе нәүбәттә ауыл сәнәғәтен аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Сөнки ауылда эш урындары булмай тороп, унда һеҙҙең дә, балаларығыҙҙың да киләсәге юҡ.***

● ***Элек тә ауылда тормош еңел булманы, әммә балалар күп тыуҙы. Элек ауылда эш тә ауыр булды, әммә кешеләрҙең ҡураһы тулы мал булды. Хәҙер иһә ауыл кешеһе илле йәшкә етә лә, мал торорға ла ҡыйынһына башлай. Ә ауылда йәшәүе ҡасан еңел булды икән? Шул уҡ ауылдарыбыҙға хәҙер үзбәктәр килеп, ерҙе арендаға алып, теплицаларҙа йәшелсә үҫтереп, үҙебеҙгә һата, бының менән үҙенең илендәге балаларын, туғандарын ҡарай. Ә беҙ һаман да уларға ҡарап ятабыҙ.***

● ***Бөгөн уҡытыусыларҙың артыҡ күп булыуы ваҡытлыса ғына күренеш. Ни өсөн тигәндә, 2015-2016 йылдарҙа уҡ уҡытыусылар, бигерәк тә башланғыс класс уҡытыусылары етешмәйәсәк. Бөгөн беҙ балалар баҡсаларында балаларға урын еткерә алмайбыҙ, иртәгәгә был хәл мәктәптәрҙә күҙәтеләсәк һәм иң беренсе нәүбәттә уҡытыусылар етешмәйәсәк. Шуға ла ауылдарҙа мәктәптәрҙе ябып, ҡабаланманыҡмы икән, тип тә уйланыла.***

**(Был фекерҙәрҙе 8-9-сы биттәге монологта уҡығыҙ).**

## БАЙРАМ МЕНӘН!



БАШ ЙОРТТА...



# БӨГӨНГӨНӨҢ... иртәгәһе лә бар

**Ҡунаҡ көткән кеше нимә эшләй? Эйе, ялтырап торһа ла, өйөн тағы ла һылай-һыйпай, яңырта, төҙәтә, буяй, йыуа. Өфөбөҙ ҙә һуңғы ваҡытта ҡунаҡ көткән кешегә оҡшап китте. Урамдар төҙөкләндерелә, йорттар матурлана, йылдар буйы төҙөлөп бөтә алмаған биналарҙа эштәр тамамлана. Ә бөгөн иһә баш ҡала ҡышҡы сүп-сарҙан таҙартыла.**

Ихлас һәм матур итеп ҡунаҡ ҡаршылау ғәҙәте башҡортта элек-электән килгән матур күренеш. Әле күптән түгел булып үткән ҙур спорт сараларында ҡатнашыусылар ҙа башҡорт ҡунаҡсыллығын күрҙе һәм тойҙо. Шулай уҡ Өфөлә уҙасаҡ һәм үҙенә донъя лидерҙарын йыясаҡ саммиттарға килеүселәр ҙә быны юғары баһалар, тип ышанам. Республикабыҙҙың баш ҡалаһы ҡунаҡтарҙа тик ыңғай тәьҫораттар ғына уятһын өсөн бында әле үк оло эштәр башҡарыла. Быны шулай икәнлеген һәр кем күрә йөрөй. Ләкин ҡайһы берәүҙәрҙең әҙ генә унайһыҙлыҡтарға ла түҙмәйенсә, башҡарылған эштәрҙе яманлап йөрөүе күңелде ҡыра. Киләсәктә ҡалабыҙ тағы ла күркәмерәк, йәшәү өсөн унайлыраҡ буласағын аңлау ауырға төшә, күрәһең, уларға. Тик бөгөнгөнөң иртәгәһе бар икәнлеген онотмайыҡ, өфөләләр. Әле барған төҙөлөш эштәре ҡыйынһындырамы? Ә иртәгә ошо урында күҙҙең яуын алып ултырған заманса бинаның ҡалҡыуын күҙ алдына баҫтырыу, бәлки, бер аҙ тынысланырға булышлыҡ итер.

Ишетеүемсә, уҙасаҡ ҙур сараларға тиклем Өфөлә өр-яңы 10 ҡунаҡхана төҙөләсәк икән. Әлбиттә, ҡалабыҙҙа заман талаптарына тура килгән, күркәм ҡунаҡханаларҙың барлыҡҡа килеүе кире күренеш түгел, шулай ҙа, ундай ҡунаҡханалар ни өсөн ул тиклем күп кәрәк һуң, тигән һорау тыуа. Инвесторҙар аҡсаһына төҙөләсәк, тиелһә лә, сығымдарҙың күпмелер өлөшөн барыбер республика һәм ҡала бюджеттарына күтәрергә тура киләсәктер бит инде ул. Тимәк, әллә күпме төҙөләсәк балалар баҡсаһы, мәҙәниәт усаҡтары һәм башҡа социаль объекттарға үҙ ваҡытын көтөргә тура киләсәк.

Ләкин һәр башҡарылған эштең ыңғай яғын күрә белеү ҙә һәм яҡшыға юрау ҙа мөһим. Тирә-яғы төҙөкләндерелгән, йәшелләндерелгән, алдарында фонтан һыуҙары урғылып торған ҡунаҡханалар ҡалабыҙҙы тағы ла матурайтыр һәм ҡала халҡының ғына түгел, ә баш ҡала ҡунаҡтарының да яратҡан урынына әйләнер, тип ышанайыҡ.

**Венер ХӘЛИСОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Кешенең ярты ғүмере хеҙмәттә үтә. Эшегеҙ һеҙҙең өсөн аҡса сығанағы ғынамы, әллә ул күңел кинәнесе лә бирәме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Таһир БАЙМЫРҘИН, вахта ысулы менән Себерҙә эшләүсе водитель:*** Йәшермәйем, минең өсөн әлеге ваҡытта хеҙмәтем - фәҡәт аҡса сығанағы. Ауылда ла, район үҙәгендә лә эш таба алмағанлыҡтан, вахта ысулы менән эшләүҙе һайларға мәжбүр булдым. Ғаиләнән ситтә, Себерҙең ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында эшләүе еңелдән түгел, әлбиттә, шулай ҙа ғаилә аҫырау, айырым йорт һалып инеү төп маҡсатым булғас, ошо ниәт минә көс бирә. Артабан аҡса арттырып булһа, ниһайәт, яратҡан һөнәрем - умартасылыҡ эшен башлап ебәреү ниәтем. Бына был һөнәр миңә кинәнес бирер ине, исмаһам! Ауылым район төпкөлөндә, тәбиғәт ҡосағында ултыра, экология беҙҙә сағыштырмаса түҙерлек әлегә. Тик бына ауыһыҙ рәүештә урманды ҡыралар, ситтән килеп ағас ташыйҙар. Умартасылыҡ эшенә ҡартатайымдан өйрәнеп ҡалдым бер аҙ. Миненсә, мәшәҡәте күп кенә булһа ла, иң тыныс һәм изге, ҡыҙыҡлы һөнәр ул ҡортсолоҡ. Күңелгә кинәнес бирһен өсөн фәҡәт яратҡан һәм яҡшы белгән эште башҡарыу фарыз, тип уйлайым.

***Нәсимә ЮЛАМАНОВА, Өфө ҡалаһы Сипайлово бистәһендә урам һепереүсе:*** Йәш саҡта, бер заман урам һепереүсе булып эшләрмен, тигән уй башҡа ла инеп сыҡмай ине, тик тормош, яҙмыш тигәнең кешене әллә ниндәй сүрәткә лә индерә ала икән. Бынан 15 йыллап элек педагогия университетының филология факультетына конкурстан үтә алмағас, әхирәтем менән тотоҡ та Өфө моторҙар берекмәһенә эшкә урынлаштыҡ. Ошонда бер егет менән таныштым, өйләнештек, атаҡта йәшәнек. Бер аҙҙан ирем ҡыҫҡартыуға эләгеп, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ идаралығына сантехник булып эшкә урынлашты. Декреттан сығып эшләй башлағас, мине лә "ҡыҫҡарттылар". Унан завод ятағынан ҡыуа башланылар. Сараһыҙҙан ирем эшләгән идаралыҡҡа килеп, урам һепереүсе булып эшкә урынлаштым. Ведомстволыҡы булһа ла, торлаҡ бирҙеләр. Шулай итеп, эшләп алып киттем. Тәүҙәрәк ауылдаштарҙан, таныштарҙан ояла, уңайһыҙлана инем, сөнки беҙҙә бит урам һепереүсегә кәмһетеп ҡарарға өйрәнгәндәр. Уның ҡарауы, мин хәҙер аңланым: һөнәрҙең ояты юҡ, әйҙә ана, эш юҡ, тип, өйҙә бот күтәреп, ҡарттар пенсияһы, балалар аҡсаһы иҫәбенә йәшәп ятҡан әрәмтамаҡтар оялһын! Балалар үҫә, уларҙы уҡытырға ла хәҙер бөтә тапҡаның китеп тора. Аҡса етмәгәс, ике-өс участка алып та эшләйем, подъездарҙы йыйыштырам. Ярай, улдарым аңлап тора: ярҙам итәләр. Аталары менән икебеҙ ҙә уларҙы бер нәмәгә ҡарамай уҡытырға, кеше итергә тырышасаҡбыҙ. Бына шул маҡсат миңә хеҙмәтемдән кинәнес булмаһа ла ҡәнәғәтләнеү табырға ярҙам итә. Һәм, гөмүмән, нисә йылдар ҡый һеперә-һеперә, йәшәгән, эшләгән донъямды ғына түгел, уйҙарымды ла сүп-сарҙан таҙартырға өйрәнеп киттем, буғай. Әҙәм күңелдәрен дә ана шулай һепереп-түгеп таҙартып булһын ине, тип хыялланам һәм һөнәрем минә хатта оҡшай башлай. Баш ҡалабыҙҙа урам һепереүсегә юҡҡа ғына һәйкәл ҡуймағандар. Был һөнәрҙең ниндәйҙер ғиллә бар, тимәк. Үкенескә күрә, арабыҙҙағы күпселек халыҡ бигерәк тәрбиәһеҙ шул әле: ҡыйларға ғына белә, хатта үҙҙәре йәшәгән йорт алдын булһа ла, урамдарҙы таҙа, йыйнаҡ тотоу тигәнде уйлап та бирмәйҙәр.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# КЕМ АЛЫҠ?

**Март айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән тәүге 10 уҡыусыбыҙға Ноғман Мусиндың "Алдар батыр" китабын ебәрергә вәғәҙә иткәйнек. Бына улар, ошо китапҡа лайыҡ булыусылар:**

Миәкә районы Илсеғол ауылынан Гүзәл Ниғмәтуллина, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Гәлиә Вәлиева, Ейәнсура районы Аҡдәүләт ауылынан Хәснулла Айсыуаҡов,Салауат районы Малаяҙ ауылынан Хафира Сабирова, Мәләүез ҡалаһынан Рәйсә Лоҡманова, Баймаҡ районы Шүлкә ауылынан Юламан Раев, Саҡмағош районы Саҡмағош ауылынан М. Ғүмәрова, Учалы районы Ураҙ ауылынан М. Хафизова, Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан З. Низамова, Өфө ҡалаһынан Г. Сәйфуллин.



**Һәм тағы.** Баймаҡ районының Ярат ауылы халҡы "Киске Өфө" гәзитен бөтөн ауылдары менән уҡыйҙар, тиһәк тә хата булмаҫ. Бына әле лә иң әүҙем уҡыусыбыҙ, дуҫыбыҙ Мәхмүзә апай Исламғолова ошо ауылдан утыҙлап кешенең гәзитебеҙгә яҙылыуы тураһында хәбәр итте. Оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ яраттарға һәм улар өсөн дөйөм бер бүләк әҙерләнек: 1-әр дана "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", "400 башҡорт халыҡ йыры", башҡортса "Көрьән-Кәрим", С.Руденконың "Башҡорттар", Башҡорт костюмы" һәм, әлбиттә, Ноғман Мусиндың "Алдар батыр" китаптарынан торған "Кескәй китапхана" ул. Яраттар бергә йыйылып, халҡыбыҙҙың төрлө йолаларын атҡарырға, байрамдар үткәрергә ярата, беҙ бүләк иткән был китаптар уларҙың бәләкәй генә уртаҡ шәхси китапханаһына нигеҙ һалһын, әйҙә, тинек. Яраттар өлгөһөнә эйәргән башҡа ауылдар ҙа ошондай уҡ "Кескәй китапхана"ға эйә була ала.

● Шулай итеп, 2013 йылдың икенсе яртыһына 50665 индексы "Киске Өфө" гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була. Апрелдә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан РФ Дәүләт Советының "Бюджет сығымдарының һөҙөмтәлелеген арттырыу буйынса саралар тураһында" ултырышына материалдар әҙерләүҙә ҡатнашасаҡ илдең биш субъекты иҫәбенә инде. Дәүләт Советы ултырышы ағымдағы йылдың августында Мәскәүҙә үтәсәк. Мәскәү мэры Сергей Собянин етәкселегендәге эш төркөмө составына 25 кеше инде. Улар араһында Рәсәйҙең биш төбәге етәкселәре, шул иҫәптән БР Президенты Рөстәм Хәмитов бар.

✓Башҡортостанда эш визиты менән РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко булып китте. Осрашыуҙарҙа ул Башҡортостандың ышаныслы үҫешкән төбәк булыуын билдәләне. Уның һүҙҙәренсә, 2015 йылда ҙур халыҡ-ара саммиттарҙы үткәреү урыны итеп Өфө осраҡлы ғына һайланмаған. Саммиттарҙы үткәреү ҡала мөмкинлектәрен үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк. Осрашыуҙарҙа төбәкте социаль-иктисади йәһәттән үҫтереү өлкәһендәге уңыштар билдәләнде.

✓Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһының симуляция үҙәгендә булды. Бында уны клиниканы үҫтереү планы менән таныштырҙылар. Атап әйткәндә, Федераль адреслы инвестиция программаһы сиктәрендә күҙәнәк технологиялары институтын булдырыу планлаштырыла. Был маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн БДМУ алдағы йылдарҙа Федераль медицина-биология агентлығынан 250 миллион һумға ҡоралмалар аласаҡ, ә республика дөйөм майҙаны 500 квадрат метр тәшкил иткән бүлмәләр менән тәьмин итәсәк. Шулай уҡ Федераль адреслы программа сиктәрендә заманса хирургия корпусын асыу планлаштырыла.

✓"2013-2020 йылдарға Башҡортостан Республикаһының һаулыҡ һаҡлау системаһын үҫтереү" программаһын тормошҡа ашырыуға 650 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтеү планлаштырыла. Дәүләт программаһына ярашлы, республикала беренсел медицина-санитар ярҙам күрһәтеүсе йәнә 26 бүлек һәм 226 кабинет асыу ҡарала. Ашығыс медицина ярҙамы бригадалары һаны федераль нормативтарға ярашлы арттырыласаҡ (10 мең кешегә бер бригада). 2020 йылға тиклем 20 амбулатория, табиптар өсөн 50 офис, 500 фельдшер-акушерлыҡ пункты, 67 дауахана төҙөү һәм реконструкциялау планлаштырыла. Балалыҡ һәм бала табырға ярҙам итеү буйынса 28 учреждение төҙөләсәк.

✓ *Яуызлыҡ - аллаһыҙлыҡ күрһәткесе. Яуызлыҡ шул уҡ ҡараңғылыҡ, һалҡынлыҡ кеүек, кеше тарафынан аллаһыҙлыҡты аңлатыр өсөн уйлап сығарылған һүҙ генә. Алла яуызлыҡты тыуҙырмаған.*



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ИМАНҺЫҘ...

## ҡурҡаҡ булыр

**Ҡапылғарай уйлағанда, иманһыҙ кеше, киреһенсә, ҡурҡаҡ та булмаҫҡа тейеш һымаҡ. Ни өсөн тигәндә, башҡаларға зыян килтереп яһалған яуыз ҡылыҡтары өсөн намыҫ, выждан ғазаптары кисереүҙән ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәгән кеше башҡаһынан да ҡурҡмайҙыр, тигән уй нығынған. Иманһыҙ кеше шул уҡ ваҡытта батыр ҙа түгел һымаҡ. Әммә иманһыҙ кеше яһаған батырлыҡтың башҡаларға яҡшылыҡ килтереүе лә бар бит әле. Әйтәйек, ниәтһеҙ генә, осраҡлы рәүештә. Был осраҡта нисек икән? Ҡыҫҡаһы, "Иманһыҙ ҡурҡаҡ булыр" әйтеме, беҙ уйлағанса, ябай ғына йөкмәткеле түгел. Ошо өс кенә һүҙҙән торған әйтемгә бер үк ваҡытта оло мәғәнә һәм оло ҡапма-ҡаршылыҡ һалынған. Булмаһа, әйтемдең йөкмәткеһен ҡапма-ҡаршылыҡлы фекер юҫығында тикшереп ҡарайыҡ.**



Тәнзилә Ғәйфуллина һүрәте.

–Донъялағы һәр нәмә Хоҙай тарафынан барлыҡҡа килтерелгәнме? - тип һораған университет профессоры үҙенең табиптарынан.

-Эйе, барыһы ла Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәтенән, - тип ҡыйыу ғына яуап биргән бер студент.

-Хоҙай донъялағы бар нәмәне лә яралтҡанмы? - тип артабан һораған профессор.

-Эйе, - тип яуаплаған студент.

-Әгәр ҙә Аллаһы Тәғәлә барыһын да барлыҡҡа килтергәс, донъялыҡтағы яуызлыҡты ла ул бар иткән булып сыға бит. Икенсенән, һәр кемдең ҡылған ғәмәле уның асылын, булмышын билдәләй, тигән принцип буйынса ҡараһаҡ, яуызлыҡты бар иткән Аллаһы Тәғәлә үҙе лә яуызлыҡ булып сыға түгелме, улай булғас?

Студент профессорҙың был һорауына бер нисек тә яуап ҡайтара алмаған. Был хәлдән профессор оло ҡәнәғәтлек кисергән. Ул студенттары алдында Аллаһы Тәғәләгә ышаныуҙың буш нәмә икәнен иҫбатлауы менән маҡтанырға тотонған. Шул саҡ бер студент ҡулын күтәргән дә профессорға шундай һорау биргән:

-Һеҙгә һорау бирергә мөмкинме, профессор? Донъяла һалҡынлыҡ бармы?

-Шул да булдымы һорау? Нишләп булмаһын ти һалҡынлыҡ, бар. Ниңә, һинең бер ваҡытта ла өшөгәнең булманымы ни?

Башҡалар профессорға ҡушылып, был студенттың мәғәнәһеҙ һорауынан көлөргә тотонған. Студент артабан һүҙен шулай дауам иткән:

-Ысынында иһә, сэр, һалҡынлыҡ донъяла юҡ ул. Физика закондары буйынса, беҙ нимәне һалҡынлыҡ тип атайбыҙ, ул бары тик йылылыҡтың булмауын ғына иҫбатлай. Кешене һәм предметты физикала энергия барлығы йә тапшырыуға һәләтле булыуы күрһәткестәре буйынса ғына өйрәнергә була. Фаренгейт буйынса, минус 460 градус абсолют нулгә, йәғни йылылыҡтың тулыһынса булмауына тиң. Бындай температурала материя инертлыға, йәғни бөтөнләй һәләтһеҙгә әүерелә. Тимәк, беҙ "һалҡынлыҡ" терминын йылылыҡтың юҡлығын аңлатыр өсөн генә файҙаланабыҙ. Улайһа, мин һеҙгә, профессор, йәнә бер һорауымды бирәм: донъяла ҡараңғылыҡ бармы?

-Бар, әлбиттә...

-Һеҙ тағы ла хаталанаһығыҙ, сэр. Ҡараңғылыҡ та юҡ донъяла. Ысынында ул яҡтылыҡтың булмауын аңлата. Ни өсөн тигәндә, беҙ яҡтылыҡты өйрәнә алабыҙ, әммә ҡараңғылыҡ бындай өйрәнеү объекты була алмай. Беҙ хатта Ньютондың призмаһы ярҙамында аҡ нурҙы бер нисә төҫтәге өлөшкә бүлеп, һәр өлөштөң тулҡын оҙонлоғон да үлсәй алабыҙ, әммә ҡараңғылыҡты был рәүешле үлсәй алмайбыҙ. Ябай ғына нур шәлкеме ҡараңғылыҡ донъяһына килеп инә лә уны юҡҡа сығара. Ниндәйҙер йышлыҡтың ни дәрәжәлә ҡараңғы булғанын белеү ҙә мөмкин түгел бит. Беҙ ҡараңғы донъяның яҡтыра башлауын ҡараңғылыҡ үлсәме менән түгел, яҡтылыҡ үлсәме менән билдәләйбеҙ. Шулай түгелме ни? Ҡараңғылыҡ - ул яҡтылыҡ булмаған осраҡта кешенең был хәлде аңлата торған төшөнсә. Сэр, ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, яуызлыҡ бармы был донъяла?

-Әлбиттә, мин был хаҡта башта уҡ әйттем бит инде. Беҙ яуызлыҡ менән көн һайын осрашабыҙ. Ер йөҙөндә сәғәт һайын, минут һайын кеше кешенең ғүмерен ҡыя, яуызлыҡ ҡыла, теге йәки был урында мәңге тынмаҫ һуғыштар бара. Былар барыһы ла яуызлыҡтың донъяла барлығын иҫбатлай инде, - тип яуаплаған профессор хәҙер инде үҙ һүҙенең хаҡлығына ышанмаған һәм икеләнеүгә ҡала барған кешеләй.

-Сэр, яуызлыҡ донъяла юҡ ул. Яуызлыҡ - аллаһыҙлыҡ күрһәткесе. Яуызлыҡ шул уҡ ҡараңғылыҡ, һалҡынлыҡ кеүек, кеше тарафынан аллаһыҙлыҡты аңлатыр өсөн уйлап сығарылған һүҙ генә. Алла яуызлыҡты тыуҙырмаған. Яуызлыҡ яҡтылыҡ, йылылыҡ ише ышанысты һәм мөхәббәтте аңлатмай. Яуызлыҡ - кеше йөрәгендә Аллаһҡа мөхәббәт булмауының һөҙөмтәһе. Яуызлыҡ йылы булмағандағы һалҡынлыҡҡа, яҡтылыҡ булмағандағы ҡараңғылыҡҡа оҡшаған.

Профессор уға яуап итеп йә үҙ дәғүәһен белдереп, бер һүҙ ҙә әйтә алмаған һәм студенттары алдында оятҡа ҡалған. Ә был ҡыйыу һәм төплө фекерле студент кем булған тиһегеҙме? Әлбиттә, ул киләсәктәге мәшһүр ғалим Альберт Эйнштейн булған.

Хәҙер инде профессор менән Эйнштейндың бәхәс логикаһы буйынса "Иманһыҙ ҡурҡаҡ булыр" әйтемен уға ҡапма-ҡаршылыҡлы мәғәнәләге икенсе бер "Алланан ҡурҡмағандан ҡурҡ" тигән әйтем менән йәнәш ҡуйып ҡарайыҡ.

Тик уларҙы йәнәш ҡуйып ҡарағанда ғына хәҡиҡәткә яҡынная барабыҙ кеүек. Ни өсөн тигәндә, иманһыҙҙың, асылда, ҡурҡаҡ булыуы йөрәгендә Аллаһ булмауынан килә һәм фәҡәт Аллаһтан ҡурҡыу ғына ысын мәғәнәһендәге ҡурҡыу тойғоһо булып иҫәпләнергә тейештер. Ни өсөн шулай һуң? Сөнки Аллаһтан ҡурҡыу тойғоһо йөрөгән йөрәктә берҙәй үк кимәлдә Хаҡ Тәғәләгә һөйөү ҙә булалыр һәм йөрәгендә бындай тойғоно йөрөткән кеше башҡа бер нәмәнән дә ҡурҡмайҙыр, тип аңларға була бында. Хоҙайҙан ҡурҡмағандан ҡурҡырға кәрәкме һәм ни өсөн? Сөнки бындай кешенең йөрәгендә Аллаһтан ҡурҡыу тойғоһо ла, Уға һөйөү тойғоһо ла булмағанлыҡтан, ул ысынлап та ҡурҡыныс кеше, сөнки ул иманһыҙ, йәғни ҡурҡаҡ кеше. Йөрәгендә Аллаһты йөрөтмәгән кеше мөхәббәтле лә була алмай, сөнки профессор менән студенттың юғарыла килтерелгән бәхәсендәгесә, ҡараңғылыҡ, һалҡынлыҡ кеүек үк, ҡурҡаҡлыҡ, мөхәббәтһеҙлек тойғолары ла кеше күңеленең һәм йөрәгенең аллаһыҙлығын белдереүсе төшөнсәләр генә.

Ҡөрьәндең "Әл-Мәәидәһ" (Аш табыны) сүрәһенең 44-се аятында Хаҡ Тәғәлә әҙәм балаларына түбәндәгесә өндәшә: "Кешенән ҡурҡмағыҙ, Минән ҡурҡығыҙ! Минең аяттарымды бушҡа алмаштырмағыҙ!..."

Быға Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың киң билдәле шиғырын шулайыраҡ итеп үҙгәртеп өҫтәргә лә була:

*Йөрәгендә Аллаһ*
*булмағандың*
*Кеше булырға ла хаҡы юҡ...*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ил башлығы Владимир Путин 2014 йылда "Рәсәй Федерацияһында Мәҙәниәт йылын үткәреү тураһында"ғы указға ҡул ҡуйҙы. Указда билдәләнеүенсә, Мәҙәниәт йылы "йәмәғәтселек иғтибарын мәҙәниәтте үҫтереү, мәҙәни-тарихи мираҫты һаҡлап ҡалыу мәсьәләләренә һәм Рәсәй мәҙәниәтенең бөтә донъяла тотҡан роленә йәлеп итеү маҡсатында" үткәрелә. РФ Хөкүмәтенә Рәсәйҙә Мәҙәниәт йылын үткәреү буйынса ойоштороу комитетын булдырырға, уның составын раҫларға, төп саралар планын әҙерләргә һәм раҫларға ҡушылды. РФ субъекттарының башҡарма власть органдарына исемле йыл сиктәрендә тейешле саралар ойошторорға тәҡдим ителде.

✓БР Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһында "Балалар баҫма графикаһы. Өфө-2013" күргәҙмәһе асылды. Унда Белоруссия, Һиндостан, Польша, Рәсәй, Сербиянан, шулай уҡ Мәскәү, Хайдарабад, Өфө, Витебск, Омск, Мозырь, Рыбник, Борзя, Суботица, Биробиджан ҡалаларынан балаларҙың төрлө стилдә һәм техникала башҡарылған эштәре тәҡдим ителәсәк. Күргәҙмә 1 июнгә тиклем эшләйәсәк.

✓Өфө Халыҡ-ара Аксаков байрамын үткәреүгә әҙерләнә. Матур йолаға әүерелгән байрам быйыл 23-сө тапҡыр үткәрелә. Төп саралар сентябрь аҙағында Өфөлә, шулай уҡ Бәләбәй районының Надеждино ауылында, Ырымбур һәм Һамар өлкәләрендә үтә.

✓"Нефтсе" мәҙәниәт һарайында "Студент яҙы - 2013" республика фестиваленең гала-концерты үтте. Март айында старт алған фестивалдең аҙаҡҡы этабында иң һәләтле студенттар һәм иң яҡшы ижади коллективтар сығыш яһаны. "Студент яҙы - 2013" республика фестивалендә еңеүселәр бөтә Рәсәй кимәлендәге марафонда ҡатнашасаҡ. Сара 15-20 майҙа Ульяновск ҡалаһында үтә.

✓Силәбелә тәүге тапҡыр "Йәшлек-шоу" фестивале үтте. Мәҙәни сара башҡорт телен һәм эстрадаһын популярлаштырыу, йәштәр араһында ватансылыҡ идеяһын йәйелдереү, йәш таланттарҙы асыҡлау маҡсатында ойошторолдо. Фестивалгә 300-ҙән ашыу кеше йыйылды. Башҡорт йыры байрамында Өфөнән килгән ундан ашыу артист ҡатнашты.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Ауыл өстөн малдарҙың ҡото алынып баҡырышыуы, кешеләрҙең ҡурҡып ҡысҡырыуы, электр бағаналарының, кәртә-ҡураларҙың шатыр-шотор килеп ауған тауыштары баҫып ала.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТУПРАҠ...

## килем сығанағы

**Бөгөн ҡала округы территорияһында федераль милектә булған ерҙәр - 1,17, республика милкендә булғандары - 1,25, муниципаль милектәгеләре 0,74 процент тәшкил итә. 55,6 процент ерҙәр граждандарҙың һәм предприятиеларҙың шәхси милкендә. 41,25 процент ерҙәр милек хоҡуғы менән сикләнмәгән.**

Бер ҡараһаң, ҡара тупраҡ, йәшел үлән кеүек кенә күренһә лә, ул бюджетка аҡса индереүсе ресурстарҙың береһе булып та тора. Ҡуйылған бурыстар сиктәрендә былтыр Ер ресурстары буйынса идаралыҡ 1 миллиард 85 миллион һум табыш килтергән. Бында төп урынды ерҙе ҡуртымға алған өсөн түләүҙәр ала. Улар ер мөнәсәбәттәре буйынса алынған килемдең 85 процентын тәшкил итә. Бөгөн муниципаль берәмек тарафынан барлығы 15 579 ҡуртым килешеүе төҙөлгән. Шуларҙың 80 проценты - граждандар өлөшөнә тура килә.

Матбуғат конференцияһында ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Александр Филиппов белдереүенсә, әлеге көндә ер мөнәсәбәттәре өлкәһендә норматив-хоҡуҡи базаны тәртипкә килтереү, килешеү текстарына яңы положениелар индереү, шарттарҙы ҡәтғиләштереү бурысы тора. Сөнки ҡайһы бер ҡуртымсылар ерҙе ҡуртымға алып, төрлө юлдар аша ҡуртым хаҡын түләүҙән ситләшә һәм бюджетка миллионлаған һумдар инмәй ҡала. Ошо көндәрҙә ҡуртым килешеүен өҙөү тураһында 200 юридик шәхескә белдереү ҡағыҙы ебәреләсәк. Бының өсөн ике сәбәп бар: йә ҡуртым хаҡы түләнмәгән, йә ер үҙләштерелмәгән.

Миҫал итеп Александр Анатольевич Нуғай ҡасабаһындағы хәлде килтерҙе. Унда 1,5 мең гектар ер ауыл хужалығы эшмәкәрлеге алып барыу өсөн ҡуртымға алынған, ләкин үҙләштерелмәгән. Хәҙер шул ерҙәрҙе ҡабат ҡалаға ҡайтарыу буйынса эш алып барыла. Һуңынан инде ул ерҙәр Аҙ ҡатлы йорттар төҙөү идаралығына биреләсәк һәм унда льготалы категория граждандары өсөн шәхси торлаҡ төҙөләсәк. Граждандар ҡыйыҡлы буласаҡ, ә бюджетҡа аҡса инәсәк.

Әйткәндәй, күп ҡатлы йорттар тирәһендәге территорияларҙы милеккә күсереү буйынса ла эштәр алып барыла. Әлегә йорт милекселәре ер өсөн һалым түләмәй, ә инде яңы норматив ҡабул ителһә, 9 ҡатлы йортта йәшәүселәр, мәҫәлән, йылына дөйөм алғанда 18 мең самаһы һалым түләргә тейеш була. Йәғни ике бүлмәле фатирҙа йәшәүселәр өсөн был сумма йылына 250-300 һум, өс бүлмәлеләргә 350-400 һум буласаҡ. Әлегә бындай һалым бары тик Стәрлетамаҡ һәм Күмертау ҡалаларында ғына йыйыла. Һуңынан һалым ошо йортҡа ҡараған территорияны төҙөкләндереүгә йүнәлтеләсәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

БӘЛӘ БИТ!

# БУРҘАН ҠАЛҺА ЛА...

## ут-һыуҙан ҡалмаҫ

**Ҡаза яңғыҙ йөрөмәй, тиҙәр. Был юлы ла шулай булды. Апрель буйына гәзит биттәрен һәм интернеттың яңылыктар сайтын алыҫ Американың Бостон ҡалаһында булған теракт, йә Техастағы шартлау, йә почта аша ағыулы хат ебәреүсене тотоу хаҡындағы шомло хәбәрҙәр сыбарланы, йыл эсендә генә дүртәр тиҫтә миллиард долларға байыуға өлгәшкән Рәсәй олигархтарының рейтингы, уға ентекле аңлатмалар баҫылды...**







Һуңғыһы, ярай, бәлә-ҡаза ла булмаһын, ти (ә кем белә - бәғзе берәү өсөн был, бәлки, ҡазалыр ҙа), шул уҡ ваҡытта ул халыҡ күңелен йыуатырҙай йылы хәбәр ҙә түгел - быныһы раҫ. Ә бына шул уҡ ваҡытта, шул уҡ сәғәттәрҙә үҙебеҙҙең "танау аҫтында" булып ятҡан хәлдәрҙе беҙ йыш ҡына - белмәмеш тә күрмәмеш. Республикабыҙҙың ҡайһы бер төбәктәрен, шул иҫәптән Белорет районының Ғәбдүк ауылын һыу баҫыу тураһында мәғлүм булғас та, ябай халыҡ, йәмәғәтселек етди борсолоу белдереүгә ҡарамаҫтан, власть тарафтарын ниндәйҙер аңлайышһыҙ тынлыҡ баҫты. "Әлегә Ғәбдүктәр власть органдары тарафынан бөтөнләй бер ниндәй ҙә ярҙам күрмәгән,- тип яҙып сыҡты ошо хаҡта 19 апрель һанында "Йәшлек"гәзитенең махсус хәбәрсеһе Баныу Ҡаһарманова.- Бар халыҡ алдында Миронов (Белорет районы хакимиәте башлығы- **Ред.**) вәғәҙә иткән ауыр техника килмәгәс, кешеләр ҙур-ҙур боҙҙар араһынан йөрөргә мәжбүр булған... Рәсәй бәләгә тарыған сит илдәргә тонналап гуманитар ярҙам, табиптар, психологтар ебәрә, ә үҙебеҙҙекеләргә ниш-ләп бер төрлө лә ярҙам күрһәтелмәй, тигән һорау асыҡ ҡала".

Ә бит урындағы халыҡтың күҙ терәп кенә торған мал-тыуары ҡырылды, хужалығы, йорт-ҡаралтыһы эштән сыҡты. Хәйер, был хаҡта урынға барып, хәлде үҙ күҙҙәре менән күргән, халыҡ менән һөйләшеп, хәл-әхүәлдәрен һорашып-белешеп ҡайтҡан "Урал" район гәзите хәбәрсеһе Зилә Абзалованың репортажынан әҙәктәр ҙә Ғәбдүктәге бәлә-ҡаза масштабын күҙ алдына килтерергә ярҙам итер. ... 8 апрель көнө Ғәбдүк һәм Йөйәк ауылдары халҡы көн оҙоно боҙ китеүен хәүефләнеп күҙәтә. Ҡапыл ҡуҙғалған ҡалын боҙ тәүҙә Йөйәк һәм Ғәбдүк ауылы араһында тығыла һәм йөйәктәрҙе бер аҙ хәүефләндереп ала. Төштән һуң ҙур боҙ ете саҡрымға аҫтараҡ ятҡан Ғәбдүккә лә килеп етә. Иртәнән алып боҙ ҡуҙғалыуын күҙәткән Йөйәк ауыл хакимиәте башлығы Салауатов Шәүкәт Ғариф улы ике ауылдың да һыу буйында йәшәүселәрен иҫкәртә, теге-был хәл килеп тыуһа, тиҙ генә өҫкәрәк күсергә тәкдим итә. Ярҙан ярға бәрелеп аҡҡан боҙ дарьяһы Ғәбдүкте лә имен-аман үтеп китә.

Ҡараңғы төшөүгә, боҙҙоң күп өлөшө һәүетемсә генә китеп, йылға ярҙарына ҡайта һәм һыу буйында йәшәүселәр тынысланып, өйҙәренә таралыша. Кем малын өҫ яҡҡа күсергән, кире аҙбарҙарына алып ҡайтып бикләй, кемгә ҡунаҡ килгән - өҫтәл артына ултыра, өсөнсөләр иһә көндөҙгө боҙ китеү кисерештәренән арып-талып йоҡларға ята. Әммә киске сәғәт 11-ҙәр тирәһендә Ғәбдүк ауылының аҫҡы яҡта урынлашҡан яғынан ҡапыл һыу күтәрелә башлай һәм берәм-берәм йорттарҙы, ихаталарҙы, аҙбарҙарҙы емерә, мал-тыуарҙы ағыҙа, электр бағаналарын ауҙара, еңел автомашиналарҙы урынынан ҡуҙғатып алып китә башлай.

Аҙаҡтан асыҡланыуынса, Архангел районының Оҙондар ауылы эргәһендә Инйәрҙә ҙур тығын барлыҡҡа килгән һәм һыу төнгә Ғәбдүккә килеп еткән икән. Халыҡ урамға атыла. Ауыл өстөн малдарҙың ҡото алынып баҡырышыуы, кешеләрҙең ҡурҡып ҡысҡырыуы, электр бағаналарының, кәртә-ҡураларҙың шатыр-шотор килеп ауған тауыштар баҫып ала. Кешеләр тиҙерәк өйҙәренән сығып ҡасыу мөмкинлеге эҙләй, балаларын торғоҙоп, кейендереп өлгөрөргә тырыша. Балалар боҙло һыуҙан, ҡурҡыуҙан туңып ҡалтырана, ҡайһылары шунда уҡ ауырый башлай. Ауылдың аҫҡы яғында йәшәүселәрҙең күпселегенең эре малы ла, ҡош-ҡорто ла ташҡын ҡорбаны була. Өс йыл элгәре йорттары янып юҡҡа сыҡҡан Нур Ғәлиуллиндың күпме яфаланып һалған йорто тағы ла ҙур зыян күрә, малтыуары ла, 8 дадан умартаһы ла ағып китә. Үҙҙәре лә саҡ-саҡ ҡотолоп ҡала. Алдан сара күреп, Нәҡия апай Мырҙагилдинаны арьяҡта йәшәгән ҡыҙы алып ҡайта, әммә һыу ныҡ күтәрелеүен күреп, уны тиҙ генә өҫтәрәк йәшәгән күршеләренә сығаралар, малдарын да шунда ҡыуалар. Ә ауылдың аҫта ятҡан өлөшө, бигерәк тә яңы йорттарҙан торған Йәштәр урамы һуғыш үткән яланды хәтерләтә хәҙер, тип һөйләй ауыл кешеләре.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Республикала яратҡан табиптар өсөн тауыш биреү башланды: "Беҙҙең яратҡан табип" интернет-конкурсы сиктәрендә өфөләләр һәм Башҡортостан халҡы үҙҙәренең, яҡындарының тормошонда ҙур роль уйнаған табиптар тураһында һөйләй ала, шулай уҡ балалар ҙа һөрәттәре аша табиптарға рәхмәт һүҙҙәрен еткерә ала. Конкурста республиканың барлыҡ дауалау-профилактика учреждениеларынан 860-тан ашыу балалар табибы ҡатнашасаҡ. Бәйгенең махсус сайтында улар өсөн тауыш бирергә мөмкин. Еңеүселәрҙе тәбрикләү тантанаһы 1 июндә - Балаларҙы яҡлау көнөндә үткәрелә. Сайт 22 апрелдән 22 майға тиклем эшләйәсәк.

✓ Санкт-Петербургтың "Советский" концерт залында Башҡорт мәҙәниәте көнө үтте. Программа сиктәрендә Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре буйынса "Башҡортостан" киностудияһы менән төшөрөлгән фильм күрһәтелде. Сарала Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары - Азат Биксурин һәм Зәһир Исәнсурин сығыш яһаны. Шулай уҡ Люцию Буканова етәкселегендәге "Ирәндек" башҡорт фольклор ансамбле (Санкт-Петербург) ҙур концерт программаһы тәҡдим итте.

✓Башҡортостанда 25 апрелдән 25 майға тиклем автомобиль юлдарын төҙөкләндереү буйынса айлыҡ үтәсәк. Тейешле ҡарар республика Хөкүмәте бойороғо менән раҫланды. Автомобиль юлдарының торошон комплексы тикшереү һәм юлдарҙы төҙөкләндереү буйынса башҡарылған эшкә йомғаҡ яһау 15 июнгә тиклем ойошторыласаҡ.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының йыйылма командаһы педагогик йүнәлештәге юғары уҡыу йорттары араһында үткәрелгән "Яңы быуын уҡытыусыһы" бөтә Рәсәй конкурсында беренсе урын яуланы. Бәйге Удмуртияның В.Г.Короленко исемендәге Глазов дәүләт педагогия институтында үтте. Шулай итеп, БДПУ тағы ла бер тапҡыр үҙенең юғары кимәлен иҫбатланы: уҡыу йортонда юғары квалификациялы педагогтар әҙерләнә.

✓10-11 июндә Өфөнөң Ҡала мәҙәниәт һарайында VII "Аҡ һыуһар" төбәк-ара эстрада йырҙары конкурсы үтә. Конкурста еңеүселәрҙе бүләктәр һәм аҡсалата призлар көтә. Гран-при яулаусы абруйлы конкурста ҡатнашыу мөмкинлеге аласаҡ. Бәйгенең Гала-концерты 12 июндә - Ҡала көнөндә В.И.Ленин майҙанында үтә.

***✓ Ауылға юл юҡлығы ныҡ ҡамасаулай, шунлыҡтан "Тиҙ ярҙам", МЧС машиналары һәм башҡа төр техника үтеп инә алмай. Юл йылға буйында һәм ул күтәртелмәгән, шуға күрә ярға сыҡҡан боҙ ҡатламдары иреп бөтмәйенсә, юл асылмай.***

Был хаҡта телефон аша арғы яҡтан, тауҙа йәшәгән Рәхимә әбей Ғәлиуллина һөйләй:

- Бындай афәт бынан ҡырҡ йыллап самаһы элек тә булды, әммә әлеге һымаҡ ҡурҡыныс булманы. Ут һүнде, дөм ҡараңғыла кешеләр нимә эшләрен белмәй ҡысҡырыша, халыҡ ҡайҙа китергә белмәй. Малдар баҡырышып аға, Аллағынам, ахырзаман шулай булалыр ул...

Йөйәккә китеп барғанда еңел машинаһы менән боҙҙар аҫтында ҡала яҙған Филүс Асмандияров былдай һыу ташыуҙы беренсегә күреүен һәм ауыл кешеләренең бәлә килгәндә берҙәм, ҡыйыу булыуҙары тураһында һөйләй:

- Ҡурҡыныс төш һымаҡ булды был ваҡиға. Шәүкәт Ғариф улы иҫкәртеп сыҡһа ла, һыу ныҡ ташмайынса, боҙ аға башлағас, тынысландыҡ, үтеп китте, тип уйланыҡ. Аҙаҡтан шундай көслө һыу ауылды килеп баҫты һәм кешеләр үҙҙәрен үҙҙәре ҡотҡарҙы. Беҙ Ғәрифйәндең малдарын алып ҡалдыҡ. Малды ҡыуаһың, ә улар ҡурҡыуҙан тыңлашмай. Сара ҡалмағас, хатта һыйырҙы өй башына мендерергә лә маташтыҡ, әммә килеп сыҡманы. Хәтәр булды был хәл. Хәҙер ауыл кешеләренә ярҙам кәрәк буласаҡ, бер нәмәһеҙ ҡалғандар күп.

Инләп килгән метр ярымлыҡ бейеклектәге һыу дарьяһына ҡаршы ауылдың ир-егеттәре ҡалҡан булып ҡаршы сыға. Фаил Шөғәйепов һыуҙа ҡалған күрше-күләнен ҡотҡарам тип, ҡаршыға шаулап килгән ҡалын боҙҙар араһына инеп китә. Ҡәҙир, Ғилфан Шөғәйеповтар ҙа тиҙерәк кешеләрҙе, малдарҙы сығарырға ашыға. Һыуҙың иң көслө ағымына эләккән Фәүзиә менән Рәис Йосоповтарҙың бер атын һәм ҡолонҡайын ҡотҡарыу өсөн йәш егеттәр Анил Мөхәмәтшин, Илфир Рәхмәтовтар бар көстәрен һала. Икәүләшеп ҡолонҡайҙы өй башында, шулай уҡ атты тотоп торалар. Йосоповтарҙың тиҫтәнән ашыу малы, бөтә ҡош-ҡорто һәләк булған, ошо ике баш мал ғына иҫән ҡалған. Фәилә һәм Азат Ғариповтарға Вадим Баһауетдинов ярҙамлаша. Ғаян Баязитов, Рифат Ғәлиәкбәров, Сәүиә Закирова, Бакир Закиров, Ғәле Хөсәйенов, Мәксүт һәм Мәхмүт Мәһәҙиевтар, Рифат Ғилманов, эш еренән йүгереп ҡайтып еткән Рәүф Закиров һәм Ғизетдин Шөғәйеповтар, Ғилметдин Шөғәйепов, Айнур, Илгиз Мөхәмәтшиндар, Айгөл, Флүр Шөғәйеповтар туғандарына, күршеләренә, ауылдаштарына беренселәрҙән булып ярҙамға ташлана. Ғилметдин Шөғәйепов хатта ағын һыуҙан өс умартаны тотоп алып ҡала. Телефон аша ауылдаштары Айнур Ғималетдиновҡа, Камил Йыһангировҡа, Даян, Данил Мөхәмәтйәновтарға, Дамир Ғәлләмовҡа һәм уның ҡатынына, Шакир Баязитовҡа, Илшат Мәхмүтйәновҡа, Линур һәм Рәфис Ғәлиәкбәровтарға, малдарҙы һарай башына мендереп алып ҡалған Нурил Йосоповҡа, Илмир Рәхмәтовҡа, Айрат Фәткуллинға һәм уның улы Илнурға, Раяз Мөхәмәтдиновҡа, Ғәрифйән, Шәрифйән, Ғәлинур Тәкиуллиндарға, уларҙың малдарын ҡотҡарышҡан Филүс Әсмәндияровҡа, Линур Баязитовҡа, Руслан Мырҙагилдинға, Фаил Ғәлиуллинға, Әҡлимә һәм Рәмил Айытбаевтарға, Фәнил Шөғәйеповҡа, Тимур Закировҡа, Нил Ғималетдиновҡа һәм көнө-төнө ауыл халҡы араһында ҡайнап йөрөгән хакимиәт башлығы Шәүкәт Ғариф улы Салауатовҡа, уның улы Юлдаш Салауатовҡа ҙур рәхмәт белдерҙеләр. Шулай уҡ ҡотҡарыусы ауылдаштарын ҡайнар сәйе, тәмле ашы менән һыйлаған уҡытыусы Рәфиға Ибраһимоваға һәм уның ғаиләһенә, ғүмерен ҙур хәүеф аҫтына ҡуйып, боҙло һыуҙа йөҙөп йөрөп өс балаһын юғарыға мендергән һәм ҡотҡарған Әлиә Ғәлләмоваға ла оло рәхмәт белдереп шылтыратты хакимиәттең эштәр башҡарыусыһы Гәзимә Мырҙагилдина. Йөйәктән килеп ярҙам итешкән туғандарға, яҡындарына, таныштарына рәхмәтле бөгөн зыян күреүселәр.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғәбдүктәр МЧС -ты иң кәрәк мәлендә көтөп ала алмай, сөнки Белоретган ауылға ара байтаҡ, ә тимер юлы етәкселеге ярҙам итергә ашыҡмай. Бәҡһаң, улар менән килешеү юҡ икән. Шундай ваҡытта ла кеше яҙмыштарына ҡарағанда ҡағыҙҙы өҫтөн күргән бюрократтарға ни әйтәһең инде? Үҙ башына төшмәһә, кеше хәлен бик һирәктәр аңлай инде ул. Ярай әле, бәхеткә күрә, кешеләр һәләк булмаған: ауылдаштар берҙәм, фиҙакәр рәүештә бер-береһенә ярҙамға ташланған. Ошо ыңғайҙа ғәбдүктәрҙәң фекерен килтереп китеү ҙә урынлы булыр, тибеҙ: ауылға юл юҡлығы ныҡ ҡамасаулай, шунлыҡтан "Тиҙ ярҙам", МЧС машиналары, трактор һәм башҡа төр техника бында үтеп инә алмай. Юл йылға буйында һәм ул күтәртелмәгән, шуға күрә йыл һайын тау-тау булып ярға сыҡҡан боҙ ҡатламдары иреп бөтмәйенсә, юл асылмай. Урындағы халыҡты аптырашта ҡалдырып, күңелдәрендә асыу тыуҙырған тағы бер хәл тураһында ла әйтеп китмәй булмай.

Шул мәхшәр көндәрҙә БСТ һәм Рәсәй телевидениеһы аша бирелгән яңылыҡтарҙағы хәбәрҙә, МЧС шунса кешене эвакуацияланы, ауырлы ҡатындарҙы алдан уҡ мәктәпкә урынлаштырҙы, тигәнерәк мәғлүмәттәр тәптә ялған булды: районда бер кем килеп, бер кемде лә ҡотҡармаған. Ҡараңғыла, боҙло һыуҙа кешеләр үҙҙәрен үҙҙәре һәм бер-берен, мөмкин булғанса мал-тыуарын, мөлкәтен ҡотҡарышҡан. Әйткәндәй, был ташҡында Ғәбдүктә 45 йорт зыян күргән, 35 баш эре мал - һыйыр һәм аттар, шул иҫәптән ваҡ мал, ҡош-ҡорт, бал ҡорттары күстәре һәләк булған; халыҡтың умарталары, буралары, мунсалар, һалынып бөтмәгән яңы йорттар, баҙҙағы картуф, аҙыҡ-түлек аҡҡан, электр приборҙары, көнкүреш техникалары, машина-тракторҙар, йөк машиналары эштән сыҡҡан.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әле бына телефон аша ауыл советы депутаты Сәүиә Закирова менән һөйләшкәндә, ул ғәбдүктәрҙең үҙ көстәре менән хужалыҡ эштәренә тотоноуы, йорттарҙы, кәртә-ҡураларын ипкә килтереү менән мәшғүл булыуын әйтте. Тик шуныһы: ир-егеттәрҙең электр менән эшләүсе эш ҡорамалдары сафтан сыҡҡан. Өҫтәүенә, төҙөлөш материалдары ла юҡ икән. Был йәһәттән Инйәр урман хужалығы штакетник, башҡа төр ағас материалдар менән ярҙам итмәксе, тип өмөтләндерҙеләр. Аҙналынан бер изге күңелле кеше, тай бирәм, килеп алһындар, тип хәбәр ебәрһә, Татлынан бәрәсле кәзә вәғәҙә иткәндәр. "Башҡортостан" гәзитенән, Башҡортостан юлдаш телевидениеһынан мәрхәмәтлек акцияһы менән кейем-һалым, түшәк кәрәк-яраҡтары, башҡа көнкүреш әйберҙәре тейәлгән ылауҙар килгән, "Юлдаш" радиоһынан да килергә сыҡҡандар, ти. "Киске Өфө" гәзите редакцияһы ла бындай изге саранан ситтә тороп ҡалманы, мәрхәмәтлек акцияһына берҙәм ҡушылды. Аҡсалата ярҙам күрһәтергә теләүселәр өсөн махсус иҫәпте хәбәр итәбеҙ:**

**Получатель:** УФК по Республике Башкортостан (Администрация сельского поселения Зуяковский сельсовет муниципального района Белорецкий район Республики Башкортостан **л/с 02013069690),**

Сч: **40101810100000010001**

В ГРКЦ НБ Республики Башкортостан Банка России г. Уфа

БИК **048073001**

КБК **79111705050100000180**

ИНН **0211001998**

КПП **025601001**

ОКАТО **80211817000**

В назначении платежа просим указать: **добровольное пожертвование пострадавшим от наводнения жителям д. Габдюково Белорецкого района РБ.**

**Зилә АБЗАЛОВА,**
**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# ҺАЛЫМ ХӘЛЕ НИСЕК?

**2011 йылда торлаҡ тупланмаһы кооперативы (жилищный накопительный кооператив) аша фатир һатып алдым. Фатир хаҡының 2 млн 229 мең һумы тулыһынса түләнде, ә ҡалған 180 мең һумын кооператив кисектереп түләү мөмкинлеге бирҙе. Өй файҙаланыуға тапшырылған, фатир хужаларына унда йәшәү өсөн рөхсәт бирелгән, ләкин әлегә фатир һатып алыусыларҙың милек хоҡуғы юҡ һәм уның ҡасан булыры билдәһеҙ. Мин ҡасан һалым ташламаһын юллай алам? Әгәр фатир шәхси милек булараҡ миңә һатып алғандан алып 3 йыл уҙғас ҡына күсерелһә, һалым ташламаһын алыуға хоҡуғымды юғалтмаймыммы?**

- Торлаҡ һатып алыуға һәм төҙөүгә тотонолған сығымдар өсөн һалым аҡсаһын кире ҡайтарыу өсөн төп шарттарҙың береһе булып һалым органына йорттоң шәхси милеккә күсеүе тураһындағы документты килтереү тора. РФ Граждандыҡ кодексының 218-се статьяһына ярашлы, кооператив ағзалары милек хужаһы хоҡуғына пайҙы тулыһынса түләгәндән һуң ғына эйә була. Шуға күрә һалым аҡсаһын ҡайтарып алыу хоҡуғы ла пай тулыһынса түләнгән йылдан башлап барлыҡҡа килә. Әйтергә кәрәк, торлаҡ һатып алғанда йәки төҙөгәндә һалым аҡсаһын кире ҡайтарыу күпме ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан башҡарыла.

**Шәхси эшҡыуар булараҡ, тейешле һалымдарҙы ваҡытында түләйем. 2013 йылдан шәхси эшҡыуарҙарға патент алыу мәжбүри буласаҡ, тигәндәрен ишеткәйнем. Был дөрөҫмө?**

- РФ Һалым кодексының 26.5-се "Һалым һалыуҙа патент системаһы" бүлегенә ярашлы, патент йәки башҡа төрлө һалым түләү системаһына күсеүҙе шәхси эшҡыуар үҙе хәл итә. Башҡортостан Республикаһы территорияһында һалым һалыуҙың патент системаһы 2013 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инде. Ул 2012 йылдың 29 октябрендә 592-з һанлы "Башҡортостан Республикаһында һалым һалыуҙа патент системаһы тураһында"ғы Закон нигеҙендә ғәмәлгә ашырыла.

**Ҙур булмаған интернет-магазин асып, шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә иҫәп тотам. Был осраҡта мин ниндәй һалымдар түләргә тейеш булам? Бухгалтер эштәрен алып барыу өсөн махсус кеше йәлеп итеү мөһимме?**

- Ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан шәхси эшҡыуарҙар үҙҙәре теләгән һалым түләү режимын һайлай ала. Һалым ҡануниәте тарафынан шәхси эшҡыуарға мотлаҡ рәүештә эшкә бухгалтер йәлеп итеү бурысы ҡаралмаған, йәғни шәхси эшҡыуар үҙ теләгенән сығып эш итергә хоҡуҡлы.

**БР буйынса Федераль Һалым инспекцияһы әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған рецепттарҙы ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән кәнәшләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеген онотмағыҙ.**

### Ағастар ҙа дауа

Хоҙай биргән һәр ағас, үҫемлек әҙәм балаһына изгелек килтерә. Дөрөҫ итеп файҙалана белергә генә кәрәк, улар беҙҙә тәбиғәткә һөйөү ҙә тәрбиәләй.

❖ Тиҙҙән сейә, ҡарағат, муйыл һәм башҡа баҡса ағастары-ҡыуаҡтарҙың кәрәкмәгән ботаҡтарын ҡырҡып, яндыра башлаясаҡбыҙ. Бына ошо ботаҡтарҙы яндырмаһағыҙ ине. Бик ҡарт, сусыртмаҡлы, ҡутырлыларын ваҡлап, ергә күмәһең - сереп, ашлама була. Ә йәшерәктәрен, ваҡлап, киптереп алаһың һәм ҡайнар һыуҙа бешекләп, ваннала, мунсала йыуынаһың, асыҡ һауала ҡойонаһың.

❖ Муйыл емеше, сәскәһе эс киткәндә ярҙам итә, сәскәләрен киптереп алаһың, сәй итеп эсәһең.

❖ Сейә йөрәккә дауа, емеше генә түгел, сыбыҡтары ла файҙалы.

❖ Ҡара ҡарағат - витаминдар ҡаҙнаһы, уның төнәтмәһе менән йыуынаһың, бер сыбығы ла әрәм булмай. Сәйгә һалырға булһа, ваҡ ботаҡтарын ҡайнап торған һыуҙа 1-2 минут тоторға, ҡабығындағы әсеһе сығып бөтә. Йылға тауышын ишетмәгән урындағы, урман араһындағы ҡара ҡарағат сыбыҡтарын бешереп, әсәйемдәр рахит менән ауырыған бала-сағаны йыуындыра, ағас мискәгә ванна яһап ултыртып торғайны.

❖ Ә усаҡ ҡайырыһын, ваҡланған ботаҡтарын бешереп, эренле ваҡ һыҙлауыҡтарҙы дауалаһылар. Өләсәйем, зәхмәт тә, шайтан да ҡаса, тип, ихата буйлап усаҡ ҡисәктәрен ҡыҫтырып ҡуя ине.

### Ҡан тамырҙарын таҙартыу

Ҡан тамырҙарын яҙын таҙартыу күпкә отошолораҡ.

❖ 5 ҡалаҡ укроп орлоғон, 2 ҡалаҡ йәш бесәй үләне (валериана) тамырын һәм 2 стакан балды 1 литрлыҡ термосҡа һалырға һәм уға тулғансы ҡайнар һыу ҡойоп, төнгәләккә ултыртып ҡалдырырға. Иртәнсәк марля аша һөҙөргә, көндәҙ ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Исемһеҙ бала күп илаһа, тынысһыҙ булһа: "Бала исем һорай, тиҙерәк исем ҡуштырығыҙ", - тиҙәр ололар. Ысынлап та, ҡайһы бер осраҡта исем ҡушҡас, бала тыныслана, күп йоҡлай, әҙ илай.*



*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Бала табыуға бәйле им-том

**Балаға исем ҡушыу.** Балаға тәүге исемде кендек әбейе ҡуша. Ул баланы ҡабул иткәс тә, ен-шайтандар алмаштырмаһын, алып китмәһен, тип, берәй исем әйтә һала. Билдәле булыуынса, хатта үле тыуған йәки тыуғас та үлгән балаға ла исем ҡушыу йолаһы бар. Исем ҡуштырырға, ғәҙәттә, мулла саҡырыла. Мулла янына кендек инәһен, баланың олатай-өләсәйҙәрен дә саҡыралар. Баланың ауыҙына бал ҡаптыралар. Мулла килгәс, баланы уға ҡаратып, алдына һалалар. Ул аҙан әйтеп, аят уҡып, баланың ҡолағына исем әйтә. Исемде етенсе көндә ҡушыу яҡшы һанала. Исем ҡушылғас, муллаға: "Балам көмөш кеүек нык, таҙа булһын", - тип көмөш тәңкә биргәндәр. Башҡаларға ла яулыҡ, таҫтамал, ә кендек инәһенә күлдәк биреү йолаһы булған.

**Исем оҡшау.** Бәғзе бала исем ҡушҡанда йылмайып ебәрә, "һөйләшә", йәғни тауыш сығара. Мулланың алдынан алып киткәс, иҙрәп кенә йоҡлап китә. Әбейҙәр: "Балаға исеме оҡшаны, бала риза", - тигән һығымта яһай.

**Исем һорау.** Балаға исемде оҙағыраҡ ҡушмаһалар, ул исем һорай башлай. Исемһеҙ бала күп илаһа, тынысһыҙ булһа: "Бала исем һорай, тиҙерәк исем ҡуштырығыҙ", - тиҙәр ололар. Ысынлап та, ҡайһы бер осраҡта исем ҡушҡас, бала тыныслана, күп йоҡлай, әҙ илай.

**Исем алмаштырыу.** Бала илаҡ булһа, исеме оҡшамай, тип исем алмаштырғандар. Бала йыш ауыруһа, уға миң ҡалҡһа ла исем алмаштырғандар. Миң ҡалҡһа, "миңле исем" (Миңзилә, Миңлебай, Миңниса һ.б.) ҡушҡандар.

Йыш ауырыған балаға иҫәнлек-һаулыҡ, ныҡлыҡ, ғүмерле булыуҙы теләгән исем ҡушҡандар. Халыҡта исем алмаштырыу йолаһы ла булған. Ул төрлөсә башҡарылған.

## Йәш баланы һаҡлауға бәйле им-том

**Баланы күҙҙән һаҡлау.** Яңы тыуған баланың беләгенә ҡыҙыл еп, тәңкә бәйләү, маңлайына ҡыҙыл, аҡ йәки ҡара буяу яғыу, ҡором һөртөү, баш кейеменә мәрйен, ҡаҙ өлтөгө, тәңкә, ҡортбаш тегеү баланы күҙҙән һаҡлаған, һаҡлау сараһы булып, бишеккә тағылған артыш, миләш ботағы, төрлө төҫтәге суҡтар ҙа хеҙмәт иткән. Сәңгелдәккә ҡуйылған пәрҙә лә баланы күҙҙән һаҡлаған. Мәҫәлән, Урта Урал башҡорттарынан бына ниндәй им-томдар яҙып алынды.

**Миләш тағыу.** Күҙ теймәҫкә тип, баланың тупыйына миләш ағасы тағып ҡуялар. Күҙ миләшкә төшөп ҡала, балаға төшмәй, күҙ теймәй. Күҙ теймәһен, шайтан килмәһен, тип, бала беләгенә миләш теҙеп тә тағалар ине.

**Ҡаҙ ҡойроғон тегеү.** Күҙ теймәҫкә баланың тупыйына ҡаҙ ҡойроғондағы суҡты тегәләр ине. Ҡаҙҙың ҡойроҡ суғын алып, онға тығалар. Ул кибә, матур булып бөркөлөп кенә тора. Шуны бала тупыйына тегә торғайнылар.

**Ҡуян ҡолағын тегеү.** Күҙ теймәһен тип, бала тупыйына ҡырҙағы ҡуяндың ҡолағын тегәләр ине. Ҡуян тиреһен тунағанда ҡолаҡты киҫеп алалар ҙа, төрлө сырға (краскаға) тығалар ине. Ыҫпай, матур булып тора торғайны.

Күҙ теймәҫкә ҡуян ҡолағын тупыйға аҡ көйөнсә лә тегәләр. Шулай уҡ яурын баштарына, бала күлдәгенең түшенә суҡлап-суҡлап теккәндәр әүәле ҡуян ҡолағын.

**Тәңкә тағыу.** Ҡыҙ бала күлдәгенең түшенә әүәле тәңкә теккәндәр. Күҙ теймәҫкә, тип, беләгенә иҫке көмөш тәңкә бәйләгәндәр. Көмөш тәңкәне тишеп, баланың муйынына тағыу йолаһы ла булған.

**Суктар тағыу.** Баланың тупыйына кәшәмирҙән төрлө суктар эшләп тегәләр ине. Күҙ теймәһен өсөн күлдәктәрҙең яурын башына, түшенә лә төрлө суктар теккәндәр (Ғ. Мәхмүтова).

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*ЙӘШТӘР ҠОРО*

**Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы - бынан ҡырҡ йыллап элек баш ҡалала асылған беренсе башҡорт мәктәбе ул. Милли республикаларҙа туған телде уҡытыуға ҡаршы бар яҡлап кәртәләр ҡоролған осорҙа башҡорт зыялылары тарафынан яуланған еңеүҙең тәүге емеше булараҡ барлыҡҡа килә был уҡыу йорто. Уны тамамлаған уҡыусылар бөгөн халҡыбыҙға, республикабыҙға тоғро хеҙмәт иткән, уның бөгөнгө тарихын яҙған зыялылар. Бөгөнгө әңгәмәселәребеҙ ҙә ошо мәктәп традицияларын дауам итәсәк, уның данлы биттәрен яҙасаҡ 11-се синыф уҡыусылары. Улар уҡыу алдынғылары ғына түгел, гимназияның йәмәғәт, мәҙәни һәм спорт тормошонда әүҙем ҡатнашыусылар. Зөһрә Аҡъюлова, Ғәлиә Насертдинова, Данил Ильясов, Вәсил Илембәтов донъяға ҡараштары, үҙҙәрен борсоған һәм уйландырған күренештәр хаҡында фекерҙәре менән уртаҡлаша.**

# ҮҘЕҢ БУЛЫП ЙӘШӘҮ ӨСӨН...

## үҙ мөхитеңдә тәрбиә ал



### Мин үҙгәртергә теләгән күренештәр

**Ғәлиә.** Минең йәнде әсендергәне - башҡорт теленең дәүләт һәм аҫаба халыҡ теле булараҡ юҡҡа сығарыла барыуы. Бөгөнгө көндә республикала күп башҡорт мәктәптәре ябыла, дәрестәр ҡыҫҡартыла, башҡорт теле уҡытыусылары эшһеҙ ҡала. Йәш милләттәштәребеҙ араһында ла туған телен белмәүселәрҙе һәм белергә теләмәүселәрҙе йыш осратырға тура килә. Башҡорт ғаиләһендә үҫеп тә, улар туған телде өйрәнеүҙе инҡар итәләр. Беҙ Башҡортостанда, тыуған төйәгебеҙҙә йәшәйбеҙ. Нишләп беҙ туған телебеҙҙә аралашыу мөмкинлеген ҡулланмайбыҙ? Нишләп битарафлығыбыҙҙы еңә алмайбыҙ? Ошо хәлде үҙгәртергә, йәштәребеҙҙең туған тел, милләт өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер булыуын күрергә теләр инем.

**Зөһрә.** Бөгөнгө көндә донъяла төрлө милләт, дин, дәүләттәр араһындағы аңлашылмаусылыҡтар ҡан ҡойошҡа килтергән осраҡтарҙы күрепишетеп торабыҙ. Был хәлдәр мине ныҡ борсой. Үҙеңә оҡшамаған өсөн генә башҡаларға күҙ ҡырыйы менән ҡарау, үҙеңде башҡаларҙан өҫтөн тотоу - ҡурҡыныс күренеш. Эйе, һәр кем халҡым, ғаиләм, илем, тип йәшәргә тейеш. Шул уҡ ваҡытта үҙеңдекеләргә булған мөхәббәт башҡа төрлө ҡараштағыларға йә башҡа телдә һөйләшеүселәргә ҡарата нәфрәт тыуҙырырға тейеш түгел, бының ҡурҡыныс сиргә әйләнеүе бар.

**Данил.** Мине үҙҙәрен мосолман тип атап йөрөгән ҡайһы бер йәштәребеҙҙең башҡа халыҡтарға оҡшарға тырышып ҡыланыуы борсой. Мәҫәлән, ҡайһы бер егеттәребеҙ мосолманлыҡ, ирлек эталоны итеп кавказлыларҙың урам йәштәренә хас сифаттарын үҙләштереп алды. Әлбиттә, бындай кешеләрҙең дингә бер ниндәй ҡыҫылышы ла юҡ. Мосолманһың икән, мосолман бул, ниндәйҙер халыҡтың "текәлегенән" өлгө алырға кәрәкмәй...

### Башҡортмон тип ҡысҡырма, эштәрең менән иҫбатла...

**Зөһрә.** Ҡайһы бер башҡорт зыялыларының балалары туған телен белмәй - был мине ғәжәпкә ҡалдыра. Халҡына маяҡ булырға тейешле кешеләр үҙҙәре насар өлгө күрһәтә түгелме? Ата-әсәйем мине бәләкәй сағымдан уҡ башҡорт сараларына йөрөттө. Туҡтауһыҙ концерттарға, спектаклдәргә йөрөү ни өсөн кәрәк икәнен аңламай ҙа торғайным. Һуңынан ғына был сараларҙың туған телдә аралашыу, уйлау даирәһен киңәйтеүен аңлай башланым. Үҙ халҡың мөхитендә ҡайнау һине рухи яҡтан байыта, илһөйәрлек, телһөйәрлек тәрбиәләй.

**Ғәлиә.** Минең бер танышым бәләкәйҙән ғаиләләрендә башҡортса ғына аралашып үҫте. Ләкин урыҫ мәктәбенә уҡырға барғас, урыҫса аралашыуҙы өҫтөн күрҙе. Ошонан һуң ул башҡортса бөтөнләй һөйләшмәне, бөгөн инде туған телен бөтөнләй һанламай. Бик фажиғәле күренеш. Күптән түгел "Киске Өфө"лә Гөлфиә апай Янбаеваның бер кәлимә фекере баҫылғайны. Сит милләт ҡыҙына өйләнгән, башҡа милләткә балалар үҫтергән бер билдәле шәхестең юбилей кисәһе тураһында бара унда һүҙ. Ата-бабаларыбыҙ быуаттар буйы ҙур ҡорбандар аша һаҡлап килгән аманатҡа күҙ ҙә йоммайынса төкөргән бит был кеше. Етмәһә, милләте уны ҙур шәхес итеп күтәргән. Ундай кешеләр бындай хөрмәткә лайыҡмы?

**Вәсил.** Мин урыҫ ауылында тыуҙым, бәләкәй саҡтан урыҫ мөхитендә үҫтем, башланғыс синыфтарҙа белемде урыҫ мәктәбендә алдым. Ләкин был миңә туған телемдә һөйләшеүгә ҡамасауламаны. Сөнки ғаилә теле - башҡорт теле ине. Бала туған теле ярҙамында тирә-яҡ мөхитте танып белә, донъяға ҡарашын формалаштыра. Йәһүдтәрҙе ҡарайыҡ. Улар балаларына бәләкәй саҡтан уҡ уның аҡыллы, бай, уңышлы булырға тейешлеген тылҡып үҫтерә. Шуға ла улар ниндәй генә йәмғиәттә, дәүләттә йәшәмәһен, милләте кем икәнен онотмайҙар. Башҡорттарға ла телгә, мәҙәниәткә һөйөү милли рух аша һеңдерелергә тейеш. Баланы милли рух өлгөһөндә тәрбиәләгәндә, ул ҡайҙа ғына йөрөһә лә, милләте, теле, үҙенең ошо милләт вәкиле булыуы менән ғорурланасаҡ.

**Данил.** Милләтеңде матур эштәрең менән күтәр, тигән ҡағиҙәне һеңдерергә тейеш һәр йәш кеше. Быға өлгөләр етерлек. Беҙ бөгөн АҠШ-та һәр еңеүе һайын башҡорт костюмы кейеп рингка сыҡҡан боксер Сөләймәнов менән ғорурланабыҙ. Ҡағиҙәһеҙ һуғыш буйынса еңеүҙәргә өлгәшкән Венер Ғәлиев, паралимпия уйындары чемпионы Ирек Зарипов та үҙ милләтенә абруй өҫтәй. Шундай шәхестәребеҙ рәтен тулыландырырға ине, тип хыялланам.

### Ниндәй ҡиммәттәрҙе үҙ итергә?

**Зөһрә.** Күп тиңдәштәремдең йәшәйеш ҡиммәттәре башҡа. Зауыҡтарын арттырыу, китап уҡыу, камиллашыу хаҡында бик аҙҙар ғына уйлана, күптәр вайымһыҙлыҡта йәшәй. Камиллашыу тураһында ҡайғыртһалар, китап уҡыһалар, тормошҡа ҡараштары ла, ҡиммәттәре лә үҙгәрер ине.

**Ғәлиә.** Матди донъя хаҡындағы уйҙар, күберәк аҡса эшләү, текә телефон, ҡупшыраҡ кейем, ҡиммәтерәк машина кешеләр аңына бөтә сығанаҡтар аша һеңдерелә. Шул арҡала күптәр ошо "ҡиммәттәрҙе" маяк итеп, байлыҡ тотҡонона әйләнә. Лев Толстойҙың "Кешегә күпме ер кәрәк?" әҫәрендә үҙ теләктәрен ҡандыра алмай үлгән кеше һүрәтләнә. Уға күпме араны йүгереп үтә, шунсама майҙандағы ер биреләсәге тураһында әйтелә. Әммә был кеше күберәк ер алырға теләп, йүгерә лә йүгерә. Шулай үҙенең нәфсеһен ауыҙлыҡлай алмайынса, һөҙөмтәлә бер нәмәһеҙ донъя ҡуя. Америка индеецтары "Ҡасан һуңғы йылға ҡорой, ағас бөтә, шул саҡта ғына байлыҡтың бер ни тормағанын аңларһығыҙ", тип юҡҡа ғына әйтмәгән бит.

**Данил.** Матди байлыҡ булһын ул, ләкин уның кешене үҙ тотҡоно итеүе ҡурҡыныс. Кем үҙе аҡса эшләй, ул уның ысын ҡиммәтен беләсәк. Әлеге олигархтар араһында йә урлашып, йә кеше алдап байығандар күп. Улар тыйылған юл менән аҡса эшләүҙәре арҡаһында байлыҡтарынан файҙа күрмәй, үҙҙәре лә күңел тыныслығы тапмай. Ислам динендә, байлыҡты Аллаһы Тәғәлә кемгә теләй, шуға бирә, тип әйтелә. Кеше ошо ниғмәттең аманат икәнен аңлап, Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, мохтаждар менән бүлешһә, үҙенә лә бәрәкәте буласаҡ, йәмғиәттә лә ғәҙеллек тәьмин ителәсәк.

**(Дауамы 11-се биттә).**

✓ *Ошо яуҙарҙан һуң ырыу етәкселәре, дошманға ҡалмаһын, тип, Урал тауҙары араһындағы ҡая мәмерйәләргә иҫке китаптар, бик күп уҡ, һөңгө баштары, эйәр, әпсен-төпсөндәре, ҡылыс, ҡалҡан-хәнйәрҙәр йәшергән.*



*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ РУХИ ШАҺЫ...

## Зәйнулла ишан тураһында тағы бер кәлимә һүҙ



Тик үҙ-үҙенә ниндәй көй әйтте икән? Тыңлап тораһы ине лә бит... Тағы... Уау Вәхит атҡа менһә, артҡа ҡарап ултырып сабыр булған. Әммә ат ул ҡайҙа теләһә, шунда боролған. Атын ашарға ебәрер булһа, уны арт аяҡтарынан тышаған. Ат йыраҡ китә алмаған. Көҙ етеп, бүре көсөктәре үҫеп еткәс, халыҡ һыйырҙарын киске үрешкә сығармаған. Сөнки бүре күп булған. Ә Уау Вәхит һыйырҙарының муйынына дегеткә манылған сей сирәмәт ҡайыш тағып сығарған. Һөҙөмтәлә бүреләр, һыйырҙарға йәбешеү түгел, уларға яҡын да килмәгән. Уау Вәхит ағас күнәктәр эшләү оҫтаһы була. Әммә ҡыҙҙарының һыу ташый торған күнәктәрен махсус тишекле итеп эшләй. Һөҙөмтәһе шул: ҡыҙҙары шишмәгә бер барыр урынға өс-дүрт тапҡыр барған. Сөнки ҙур ағас сапсыҡты тултырырға кәрәк булған. Йондоҙ йымылдағанда ташылған һыу шифалы ла, бәрәкәтле лә була, тип иҫәпләгән һәм ҡыҙҙарын һыуға кис, мәҙек үткәс, йондоҙ ут алғас, ебәргән.

Зәйнулла ишандың атаһы яғынан туған был бабайы уларҙың шәжәрәләрендә юҡ, сөнки унда һәр атанан тик берәр генә бала күрһәтелгән. Һис шикһеҙ, Зәйнулла ишанды бала ваҡытынан уҡ Ер кендеге армыттары аҫтынан сыҡҡан Аҡ Иҙел, Яйыҡ, Әй, Уй, Мейәс йылғаларының һыуы һәм ере гүзәллеге рухи хазинаға ҡойондорған. Ә бабайы Уау Вәхит диндең төбәк өсөн яңы суфыйсылыҡ алымын ҡулланып, үрнәк күрһәткән. Уау Вәхит Зәйнулла тыумаҫ борон уҡ уның инәһенә: "Килен, ҡорһағыңды һаҡла. Унда ишан булырҙай бала ята", - тип күрәҙәлек әйткән.

Инәһе яғынан бик уҡымышлы, ислам тәғлимәтенең ҡануниәтен генә түгел, бөтә төрки донъяһының тарихын яҡшы белгән абруйлы, зиһенле, ғилемле һәм үҙ баһаһын белгән, тирә-йүнгә остаз булған Аҙнасура ишандың рухи һыны ла Зәйнулла күңеленә өлгө булып һеңгән була. Нәҡшбәндиә тәриҡәтен мауығып өйрәнеүгә 1859-1860 йылдарҙа Силәбе ҡалаһы тирәһендәге Сарҙаҡлы ауылы шәйехе Ғәбделхәлим хәҙрәткә мөрит булып барғас ҡына ныҡлап тотонһа ла, был ғилемдең нигеҙе һәм башы үҙ тыуған ауылы Шәрип (Әүәздә) һәм саҡырым ярым ерҙә ятҡан Аҙнасура ишандың Аҙнаш ауылына бәйле. Әлбиттә, Зәйнуллаға суфыйсылыҡ тураһындағы төп төшөнсәне ата-инәһе, ауыл мөхите тарихы бирә.

Уау Вәхит диуананың ҡәбер ташы Шәрип-Әүәз ауылы зыяратында бөгөн дә бар. Уның ысын исеме Мөхәммәт Вәхит булғанға оҡшай. Сөнки ҡәбер ташында Мөхәммәт тигән һүҙ ҙә уҡылған кеүек. Яҙыуҙы быуаттар ел-ямғыры ярайһы уҡ тигеҙләгән. Ул осорҙа ташты тәрән итеп соҡорлоҡ ҡаты тимер ҙә һирәк булғандыр.

Аҙнаш ауылында ҙур мәсет булмаған. Уй йылғаһында өс тирмән торған. Икеһенең исеме билдәле: Хәлил тирмәне, Йосоп тирмәне. АҠШ тип йөрөтөлгән Аҙнаш, Ҡужай, Шәрип ауылы бер-береһенән ярты саҡырымда ята. Урталағы Барын-Табын ауылы Ҡужай мәсетенә һәм мәҙрәсәһенә лә йөрөгәндәр, тигән хәтирә ҡалған. Күрәһең, Аҙнасура ишан шул ике мәҙрәсәлә уҡытҡан. Шул мәҙрәсәләрҙең дауамы булып Ҡужай ете йыллыҡ мәктәбе 1960 йылдарҙан һуң да эшләне. Илебеҙгә ул мәктәп фән, хужалыҡ, мәғариф, сәнәғәт өлкәһендә эшләүсе бик күп белгестәрҙе бирҙе. Улар араһында Мәскәүҙә СССР Юстиция министрлығы хеҙмәткәре булып эшләгән Бижан Абдуллин, математика фәндәре докторы Хәйрулла Мортазин, федераль кимәлдә эшләүсе нефть сәнәғәте эшмәкәре Жәүҙәт Ғәлимов, яҙыусы Рәүеф Насиров һ.б. бар.

Зәйнулла Рәсүлевтың тормош көтөүҙәге ҡеүәте үҙе инанған тәғлимәтенә сикһеҙ ышаныуында. Уның зиһенендә, аңында. Кешеләрҙе ышандыра һәм үҙ артынан эйәртә алыуы тәбиғи булмышында ла. Ул рухи эске көстө тәбиғәттән алған. Төп Урал армытының итәгендә тыуғанғамылыр, ул тауҙар менән аралашмайынса, улар менән һөйләшмәйенсә, йылдың ике миҙгелен үткәрмәгән.

Көнсығыш табындар башҡа ҡырыу-ҡәбиләләр менән үҙ мәнфәғәттәрен яҡлап һәм һаҡлап бик күп яуҙар үткәргән. Ошо яуҙарҙан һуң ырыу етәкселәре, дошманға ҡалмаһын, тип, Урал тауҙары араһындағы ҡая мәмерйәләргә иҫке китаптар, бик күп уҡ, һөңгө баштары, эйәр, әпсен-төпсөндәре, ҡылыс, ҡалҡан-хәнйәрҙәр йәшергән. Әммә ул ерҙәрҙе һанаулы ғына кешеләр белгән. Сер беләктән ҡан ағыҙып, Ҡөрьән тотоп ант итеү менән нығытылған. Сер эйәләре берәм-берәм баҡыйлыҡҡа китеп бөткәс, серҙе белеүсе һуңғы кеше, ант ғөрөфөн үтәтеп, бер улына ғына серҙе сисергә тейеш булған. Мәмерйә ауыҙын таш емереп бикләгәндәр. Инсандар мәмерйә ауыҙының теүәллеген күҙәтеп торған. Зәйнуллаға ошо сер мираҫ булып ҡалған да инде. Әммә ул сер Зәйнулла Рәсүлев 1917 йылда баҡыйлыҡҡа киткәс тә сиселмәгән була әле. Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең "Хәтирәләр"ендә ул ғәмәлдең дауамын морната биреп ҡуя. Әммә төп нөсхәһен яҙмай. Сөнки яҙырға ярамай. Хатта бер-ике кешенең ҡайһы ауылдыҡы икәнен дә яҙа. Әммә ул тарихты белмәгән кешеләр был серҙең әтнәкәһенә әле лә төшөнмәйҙәр. Ул серҙең ҡоршауын, күрәһең, бер ҡасан да сисергә ярамайҙыр. Ул сер тураһында һөйләшкән өс бабай, күрәһең, мине һәм иптәшемде бала тип иҫәпләгәндәрҙер. Беҙҙең, 12 йәшлек малайҙарҙың, һаҡҡолаҡ булыуыбыҙҙы уйламағандарҙыр. Тик беҙ икебеҙ ҙә уны ишеттек, нәмә тураһында һүҙ алып барғандарын да белдек. Тик сер урынын аңлай алманыҡ. Беҙгә ул сер булып ҡалды. Һәм әле лә сер.

Зәйнулла ишан Өстамаҡ-Троицкиҙан йыл һайын бер тапҡыр булһа ла тыуған яҡтарына ҡайтыр булған. Ҡайтҡас, атын менеп, берәүҙе лә үҙе менән алмай, тауҙар араһына киткән. Хатта бер-ике төн үткәреп ҡайтыр булған. Уның был холҡона халыҡ бер ни тиклем аптыраһа ла, аҙаҡ йыл һайын ҡабатланған хәлгә иғтибар итеүҙән туҡтаған. Ана шулай, Зәйнулла ишан тормошонда серҙәр ифрат та күп була.

Суфыйсылыҡтың төп билдәһе, ғалимы - ул күңелендә фани тормош тутынан таҙартыу, үҙеңә Аллаһ исемен генә түгел, уның рухын, бәлки, үҙен дә һеңдереү, һәр саҡ Аллаһ менән бергә булырға тырышыу, тип аңлау яҙыҡ булмаҫ. Аят сүрәләрен матур буяуҙар менән ҙур туҙға, эшкәртелгән бәрәс, быҙау йә ҡолонсаҡ тиреһенә, әгәр табылһа, ҡалын ҡағыҙға яҙып, стеналарға элеп ҡуйыу ҙа суфыйсылыҡ тәриҡәте билдәһе. Кешеләрҙең холҡо тәбиғәттә төрлө-төрлө һыҙатҡа эйә. Һәм суфыйсылыҡ тәриҡәтенә килгән ҡайһы кеше үҙ-үҙен дәрүишлек көнимешенә бағышлай. Үҙендә сабырлыҡ, түҙемлек, йыуашлыҡ тәрбиәләй. Әммә уларҙа уйлаған уйҙы кисекмәҫтән тормошҡа ашырыу һыҙаты көслө. Уның булмышына хатта дыуамаллыҡ та хас. Зәйнулла кеүек ҙур зиһенлеләр, әлбиттә, дыуамал аҙымдарын йүгәнләй белгән. Шуның менән бергә уларға кеше ҡылыҡтарын, уйламай эшләгән эштәрен кисерә белеү хас. Төрлө кешелә суфыйсылыҡ тәриҡәте төрлө сифат тәрбиәләгән. Мәҫәлән, ҡәтғилеҡ холҡо. Ҡәтғи инаныу. Ул үҙ инаныуынан бер ваҡытта ла сигенмәгән. Эске ҡәтғилек ҡырҡа маҡсат та тыуҙырған. Ҡырҡа маҡсат ҡыҙыулыҡҡа килтерһә лә инанған тәриҡәте сабырлыҡҡа, түҙемлеккә өндәгәс, ул уға буйһонорға мәжбүр.

Суфыйсылыҡты Уралға Зәйнулла ишандың оло ҡарт аталары Тупый, Ураҙғәли, Яныш, Ятабей, Манғут, Һеркә Урта Азия яҡтарынан карауансылар аша Ефәк юлы менән килтергән булһа кәрәк. Сөнки уларҙан байтаҡҡа һуңыраҡ тыуған Аҙнасура ишан, Уау Мөхәммәт Вәхит уны ентекле белмәҫ ине. Күрәһең, ул ерле халыҡ араһында электән ярайһы уҡ киң таралған була. Әммә суфыйсылыҡ киң йәмәғәтселеккә бик күптәнән таныш булһа ла, беҙгә, хәҙерге кешеләргә, Зәйнулла ишандың тормошон өйрәнгәндә тағы ла нығыраҡ асыла бара.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Дауамы. Башы 16-сы һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Ҡармаҡлы ҡорамалдарҙан башҡорттар ғәҙәти ҡармаҡ, йылтырма йәки суртанлыҡ, шулай уҡ йылға киңлегенә тартып ҡуйылған, бер нисә урында ҡармаҡ урынлаштырылған ҡулайлама файҙаланған. Ҡармаҡ менән һәр урында балыҡ тотҡандар. Ҡармаҡ һабы оҙон да, ҡыҫҡа ла булған (40 сантиметр). Был инде балыҡты кәмәлә йөрөп йәки ҡышын мәке уйып тотоуға яраҡлаштырылған. Ауырлыҡ өсөн ҡурғаш ҡуйылған. Ҡармаҡтарҙы нигеҙҙә һатып алғандар, әммә уларҙы кешеләр үҙҙәре лә эшләгән.

Урал аръяғы күлдәрендә башҡорттар ҡышын мәкеләрҙә балыҡты ҡармаҡ менән мормошҡа тотҡан. Шулай уҡ шундай ысул да ҡулланылған. Таяҡ осона һалабаш усламы бәйләп, уға ныҡ итеп он һипкәндәр һәм мәкегә тыҡҡандар.Онға мормоштар (ҡыҫала төрө) күпләп йыйылған һәм йәбешкән. Тотолған ҡыҫалаларҙы ҡалтаға (бөтөн ағастан яһалған, шыуҙырмалы ҡапҡасы булған ағас йәшник) йыйғандар. Мормоштар туңмаһын өсөн йәшникте ҡуйында тотҡандар. Шундай емле ҡармаҡ һыу эсендә булған ваҡытта балыҡсы бер нисә ҡыҫаланы ауыҙ эсендә тотҡан. Балыҡ ҡапҡас, ул тиҙ генә ҡармаҡты ауыҙындағы ҡыҫала менән емләгән.

Йылтырма менән башҡорттар бик һирәк ҡулланған һәм суртан йәки ҙур алабуғаларҙы тотҡан. Ем урынына, ғәҙәттә, ваҡ алабуғаларҙы ҡуйғандар.

Һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ ысулдарына төрлө тәбиғәт шарттары, шулай уҡ мәҙәниәте төрлө булған ҡәбиләләр һәм халыҡтар менән аралашыу ҙа үҙ эҙен һалған. Башҡорттарҙа һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ ҡоралдары артыҡ үҙенсәлекле булмаған. Бәлки, тикшереү ваҡытынаса барлыҡ үҙенсәлектәр юғалтылып бөтөлгәндер.

Беҙгә билдәле һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ ҡоралдарын өс төркөмгә бүлергә мөмкин. Беренсе төркөмгә Башҡортостандың төньяҡ һәм урманлы өлөшөндә ҡулланылған һунарсылыҡ ҡоралдары (ҡапҡан, атма, һауыт, тәпе, уҡ-һаҙаҡ һәм ҡоштарҙы ауға эләктереү) ҡарай. Был ысул борондан рустарға, Волга-Кама буйы халыҡтарына (татарҙарға, сыуаштарға, мариҙарға, коми-пермяктарға), шулай уҡ Обь йылғаһының урта өлөшөндә йәшәүселәргә (мансиҙарға һәм хант-тарға) хас булған.

Икенсе, ялан төркөмөнә башҡорттарға ғына түгел, Азияның күсмә халҡы-көтөүселәргә хас ысулдар инә: йәнлектәрҙе эттәр йәки уларһыҙ ғына, аусы ҡоштар, нигеҙҙә, ыласындар менән һыбай килеш эҙәрлекләү. Бындай ысул Башҡортостандың ялан зонаһында киң таралған була.

Өсөнсө төркөм башҡорттар араһында бөтөн ерҙә лә киң тарала. Быға йәнлектәрҙе һәм ҡоштарҙы элмәк, тоҡан менән тотоу инә. Йәнлектәрҙе - ҡапҡандар, ҡоштарҙы ҡараҫҡыға тотоу, ауға эләктереү инә.

Балыҡ тотоу ҡоралдары Волга-Кама буйы бассейны халҡына хас ҡорамалдар менән бәйле. Уларҙың күпселеге рус халҡы араһында ла, рус булмаған халыҡтарҙа ла ҡулланыла. Бары тик бер нисә ысул ғына саф башҡорттарҙыҡы була: нәрәтә ҡороу, һалдау менән һуғып алыу.

Балыҡсылыҡ, бигерәк тә һунарсылыҡ, борон башҡорттарҙың хужалығында, хатта улар Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң да, XVIII быуат аҙағына тиклем ҙур роль уйнаған. Һуңынан, рустар менән тығыҙ бәйләнештә булыу һәм ер эшкәртеү мәҙәниәте килеп инеүе, кәсепселек йәнлектәрен юҡ итеү менән бер рәттән, уларҙың әһәмиәтен кәметеп, хужалыҡтың тағы ла етештереүсәнлеге юғарыраҡ булған төрҙәре - малсылыҡ һәм ер эшкәртеүгә урын бирә.

✓ *Илебеҙҙең етештереү сәнәғәте, иҡтисады кәрәкле кимәлгә күтәрелеп, бюджет тулыланғандан һуң, юғары белем алыу ҙа тулыһынса бушлай булырына ышанысым бар. Цивилизациялы илдәр, дәүләттәр тап ошоға ынтыла.*



# БАҪҠЫС ИКЕ
## йәки Башҡаға ярҙам итеп

**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты 2015 йылда Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттарында ҡатнашасаҡ юғары уҡыу йорттары составына инер өсөн ғариза биргән. Саммит уртаһында буласаҡ ул ойошмалар араһында Ҡытайҙың, Ҡырғыҙстандың, Тажикстандың, Ҡаҙағстандың һәм Рәсәйҙең 76 юғары уҡыу йорто иҫәпләнә. БДПУ-ның унда инеү-инмәү мәсьәләһе май айында хәл ителәсәк. Әлбиттә, тәжрибә уртаҡлашыу йәһәтенән был сарала ҡатнашыу педагогия университетына ҙур мөмкинлектәр бирәсәк. Һуңғы тапҡыр үткән мониторингта Санкт-Петербург педагогия университеты менән Башҡорт дәүләт педагогия университетының Рәсәйҙең иң яҡшы педагогия уҡыу йорттары тип танылыуы ла был форумда ҡатнашыуға өмөт бирә. Ә бына университет ректоры, педагогика фәндәре докторы, профессор, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Раил Мирвай улы ӘСӘҘУЛЛИНды коллегалары, студенттары һәм республика йәмәғәтселеге туҡтауһыҙ эҙләнеүсән, алдынғы ҡарашлы әүҙем етәксе итеп белә. Урынлы һорау тыуа: юғары уҡыу йорто етәксеһе хәҙерге тынғыһыҙ заманда үҙ эшмәкәрлегендә ниндәй нигеҙҙәргә таяна? Хәйер, Раил Мирвай улының хәҙерге заман проблемалары, мәғариф, юғары белем хаҡындағы әңгәмәһендә беҙ был һорауҙарға ла яуап табырбыҙ.**

### Иң мөһиме - эшлә…

Тынғыһыҙлыҡ сифатын, бер туҡтауһыҙ кешеләр менән аралашыу ихтыяжын мин атайым менән әсәйемдән алғанмындыр, тием. Атайыбыҙ беҙҙең өсөн оло абруй өлгөһө булды. Ул беҙгә ҡарата ҡырыҫ, талапсан ине. Уның әйткән һәр һүҙе беҙҙең өсөн мотлаҡ үтәлергә тейешле ҡанунға әүерелде. Көн һайын иртәнсәк алты баланың һәр ҡайһыһына айырым бурыс йөкмәтелде һәм көн аҙағына уны үтәмәһәк, атайыбыҙ тарафынан язаһын да алдыҡ. Юҡ, ул беҙгә бер ҡасан да ҡул күтәрмәне, һуҡманы, әммә етди генә бер ҡарап алыуы йә бер һүҙ генә әйтеүе шул язаға тиң ине.

Ауылыбыҙҙа колхозлашыу башланғас, күптәр атайыбыҙ өлгөһөндә күмәк хужалыҡҡа ингән. Әммә ул дөйөм хужалыҡҡа ҡушҡан аты менән арбаһының колхоз рәйесе тарафынан ҡәҙерһеҙ файҙаланыуын күргәс, колхоздан сыға, аты менән арбаһын да үҙе менән ала. Уның артынан бик күп ауылдаштары колхоздан китә. Атайымдың һөйләүе буйынса, тейешле органдарҙан яуаплы вәкилдәр килеп, уны кире колхозға инергә өгөтләй. Был да уның абруйы хаҡында һөйләй. Әлбиттә, атайыбыҙ кире колхозға ингән, уның өлгөһөнә ауылдаштары тағы ла эйәргән.

Атайыбыҙҙың бер класс та белеме булмаған. Хәҙерге көн күҙлегенән ҡарағанда, уны наҙан кеше тип иҫәпләргә лә була. Ул 1906 йылғы, мин алтынсы төпсөк бала булып донъяға килгәндә уға 47 йәш булған. Ҡыҫҡаһы, мин бала саҡта уҡ атайыбыҙ оло йәштәге кеше булды. Ул 1945 йылдың ноябренә тиклем һуғышта була, "Дан" ордендары кавалеры. Еңеү парадында ҡатнашырға тейеш була, әммә Прагала чехтар болаһында ҡамауға эләгеп яралана һәм парадта ҡатнаша алмай.

Һуғыштан һуң ул оҙаҡ йылдар колхозда бригадир, ферма мөдире, тракторсылар бригадаһында хисапсы булып эшләне. Бер үк ваҡытта унлаған ауылды биләгән колхозда ревкомиссия рәйесе булып та торҙо. Ул үҙаллы шөғөлләнеп, математиканы, ғәрәп телен, рус теле яҙмаһын үҙләштерҙе, күп уҡыны һәм беҙҙең ғаиләгә уҡыуға яуапһыҙ ҡарау хас булманы. Беҙ һәр ваҡыт оло тулҡынланыу, борсолоу менән уның мәктәптән ата-әсәләр йыйылышынан ҡайтыуын көтә инек. Әгәр ҙә унан ҡайтҡанда атайыбыҙҙың кәйефе булмаһа, аҙна буйына күҙенә салынмаҫҡа тейеш инек. Әгәр ҙә күҙенә эләгеп ҡалһаҡ, шундай итеп ҡарар йә бер генә һүҙ әйтер ине. Шул бер ҡараш, бер һүҙ уның беҙгә биргән язаһы булды. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең йортта уҡыуға ҡарата ҡот осҡос яуаплылыҡ режимы хөкөм һөрҙө. Мин быны хәҙерге күҙлектән атайыбыҙ менән әсәйебеҙҙең уҡыуға теләктәре ҙур булып та, бының мөмкин булмауынан килеп сыҡҡан хәл тип баһалайым. Беҙҙең ауылда мәктәп 1912 йылда асылған, яңыраҡ беҙ уның 100 йыллығын билдәләнек. Атайыбыҙҙың атаһы япон һуғышынан ҡаты яраланып ҡайта һәм үлеп ҡала, алты бала араһында ҡалған атайыма шул арҡала уҡыу эләкмәй. Атайыбыҙ йыш ҡына бер һүҙҙе ҡабатларға яратты: "Иң мөһиме - эшлә, эшләһәң, бер нәмә килеп сыға ул..."

Әсәйебеҙгә килгәндә, уның фотоһы һәр ваҡыт райкомдың "Почет таҡтаһы"нда торҙо. Ул республикабыҙҙың тәүге өс мең литр һөт һауған һауынсыларының береһе булды. Һауынсы булып эшләп пенсияға сыҡҡандан һуң да кистәрен фермаға барып, үҙенең һыйырҙарының хәлен белешеп ҡайтыр ине. Һауынсылар һөйләүе буйынса, һыйырҙары уны шундуҡ танысан, ә әсәйебеҙ уларға ҡарап илаған да илаған икән. Хәҙер студенттарға был хаҡта һөйләһәң, ышанмаҫтар, моғайын. Бер мәл әсәйебеҙҙе өйҙән көрпә алып барып һыйырҙарын ашатҡаны өсөн ғәйепләп маташтылар хатта. Һыйырҙарының ас ҡалыуынан ҡурҡа ине ул. Отпускыға сыҡҡан саҡта ла һыйырҙарын йәлләп бер була торғайны.

Мин уҡып бөтөп эшләй башлағас, тәүге эш хаҡымдан әсәйемә бүләк алып ҡайтырға хыялландым. Тик уға ошо рәүешле рәхмәт әйтергә өлгөрә алманым, әсәйем баҡыйлыҡҡа күсте.

### Үҙемде һындырырға тура килде…

Тәжрибә туплауға килгәндә инде, мин тәжрибәне тормоштан алам. Мәҫәлән, миңә тыумыштан тотлоғоп һөйләшеүемдән ҡотолор өсөн байтаҡ ваҡыт үҙ өҫтөмдә эшләргә тура килде. Шулай уҡ тыумыштан уҡ мин бик оялсан һәм баҙнатһыҙ инем. Кеше менән аралашыу, кемгәлер үҙемдең фекеремде еткереү, кемдәрҙер алдында сығыш яһау минең өсөн ҙур проблема булды. Дөрөҫөрәге, миңә үҙемде һындырырға тура килде. Әлбиттә, был һынылыш еңел бирелмәне. Комсомол, армия хеҙмәте миңә үҙемде етди үҙгәртеүҙә мәктәп ролен үтәне.

Әгәр ҙә шул саҡтағы егерме ике йәшлек егет менән әле алтмышын тултырып, пенсия йәшенә еткән кеше ҡайһы яғы менән айырыла, тигән һорау ҡуйылһа, мин уны "ошо йылдарҙа йыйылған тәжрибә менән", тип яуап бирер инем. Теге егет самаһыҙ күп энергиялы, оптимист, тормошто яратыусы, ә хәҙергеһе күп кенә төшөнсәләргә бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарай. Теге егет күп уйлап тормайынса, гел алға барырға ратһа, хәҙергеһе ян-яғына ла, артына ла ҡараш ташларға мәжбүр. Был сифат, күрәһең, йәшәй-йәшәй тәжрибә менән килә торғандыр. Ә бына хеҙмәткә ынтылыш егерме ике йәштә нисек булһа, әле лә һаҡлана, донъяға романтик ҡараш та һүнмәгән әле миндә. Төп йәшәү принцибыма килгәндә, мин уны түбәндәгесә билдәләр инем: үҙемә ышанған кешеләрҙең ышанысын аҡлау. Мин йыш ҡына үҙемдең коллегаларыма һәм студенттарыма шулай тип әйтәм: баҫҡыстың ике аяғы бар, әгәр ҙә уның аяғы икәү булмаһа, уларҙың икеһен беркетеп ағас ҡуйып һәм уларға баҫып өҫкә менеп булмай. Тимәк, һин фәҡәт кешегә ярҙам итеп кенә, уны үҫтереп кенә үҙең дә үҫә алаһың. Ә кешене рәнйетеп, түбәнһетеп үҫеп булмай.

### Беҙ үткәнде киләсәккә күсерәбеҙ…

Коммунизм идеяһы киләсәккә утопиялы ҡарашҡа ҡоролһа ла, беҙ йәшәгәнендә түгел, ә дөрөҫ итеп ҡоролған социалистик йәмғиәттә кешелектең мәнфәғәте беренсе планға ҡуйыла. Ошондай йәмғиәттә кешелектең тәбиғәте үҙе сағыла һәм асылында берләшеү идеяһы ятҡан кеше һәр ваҡыт интуитив кимәлдә коллективта йәшәргә ынтыла. Кешеләр бер-береһенә ярҙам итеү юлы менән бер-береһен тулыландыра. Шул уҡ ваҡытта бер кеше ҡапыл башҡаларҙың хеҙмәте иҫәбенә байып китә. Әйтәйек, эре нефть компаниялары акцияларҙы үҙ ҡулына туплап, беҙҙең ер аҫты байлыҡтарына хужа булып китте. Ә бит тәбиғәт был байлыҡты бөтә кешеләр өсөн әҙерләгәйне. Ҡулына иҫәпһеҙ-һанһыҙ аҡса туплаған кешеләр был байлыҡты кәйеф-сафа ҡороуға, башҡа төрлө ваҡлыҡтарға әрәм-шәрәм итә башланы. Улар фәҡәт үҙҙәренең тәбиғи инстинктына бәйле ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү хаҡында ғына уйлай. Бындай тормош хатта Сәғүд Ғәрәбстаны королдәренең төшөнә лә инеп сыҡмай. Улар үҙ байлыҡтарының ҙур өлөшөн үҙ халҡы менән бүлешә.

Ә социализм осоронда күпселектең бәхетле тормош менән йәшәү хыялы тормошҡа аша башлағайны. Ул саҡта социаль мөнәсәбәттәр бик аҡыллы төҙөлдө, ә бына иҡтисадҡа килгәндә, күп кенә факторҙар иҫәпкә алынманы. Мин иҡтисадты тулыһынса аңлап еткермәһәм дә, үҙемсә етештереү өлкәһендә баҙар, ә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттә социаль ғәҙеллек ятырға тейештер, тип уйлайым. Кеше һәр ваҡыт яҡты киләсәккә барып етеү өмөтө менән йәшәргә тейештер. Гегель был йәһәттән хаҡлы: беҙ үткәнде киләсәккә күсерәбеҙ. Беҙ әле ил етәкселеге алып барған сәйәсәттә был тенденцияны бик яҡшы күрәбеҙ. Ул ҡайһы ваҡыт үҙ телмәрендә "беҙҙең коммунистик үткәндә" тигән һүҙбәйләнеште ҡуллана. Минеңсә, ул режимдағы ыңғай күренештәр киләсәккә лә күсерелергә тейештер. Беҙ барыбер диалектик спираль буйынса барырға, үҫешергә тейеш булабыҙ. Беҙҙең йәмғиәт бер килеп айныҒыр, тием, сөнки һәр ваҡыт ҡулланыусы йәмғиәт булып йәшәү, үҫешеү мөмкин түгел.

Социализм - үҙ-ара килешеп, аңлашып аралашыу сәнғәте. Кешелек һәр ваҡыт шундай йәмғиәттә йәшәргә хыяллана. Миңә элек коммунист инең, хәҙер икенсе булып киттең, тип тә әйтәләр. Ә бит ул саҡтағы идеология буйынса, үҙен, үҙенең фекерҙәрен, хеҙмәтен башҡаларға биргән кеше генә коммунист тип аталырға хаҡлы ине. Беҙҙең быуын тап шул принциптарҙа тәрбиәләнде. Ул саҡта үҙенең ыңғай сифаттарын башҡаларҙа тәрбиәләй алған кешене генә шәхес тип атанылар.

### Бушлай белем

Цивилизациялы йәмғиәттә тулыһынса түләүле белем алыу системаһы бер ваҡытта ла булмаясаҡ, тип уйлайым. Аҡсалы кешеләр күлдәрҙе, быуаларҙы, урмандарҙы һатып алып, ул урындарҙы кәртәләп ала, башҡаларҙы унда үткәрмәй. Ошо күренештәрҙе ситтән күҙәтеүселәр белемде лә һатып алырға кәрәктер һәм был мөмкин, тип уйлай. Әле мин илебеҙҙең уҡыу-уҡытыуға бәйле күп кенә закондарын ҡарап сыҡтым, барыһында ла "Белем алыу - бушлай" тип яҙылған. Илебеҙҙең етештереү сәнәғәте, иҡтисады кәрәкле кимәлгә күтәрелеп, бюджет тулыланғандан һуң, юғары белем алыу ҙа тулыһынса бушлай булырына ышанысым бар. Цивилизациялы илдәр, дәүләттәр тап ошоға ынтыла. Бында тағы ла бер ҡурҡыныс бар: белем алыу системаһы тулыһынса бушлай булғандан һуң кешеләр тағы ла белемде үҙенең үҫеше өсөн файҙаланыусыға түгел, ә ҡулланыусыға ғына әүерелмәҫме?

### Мәктәптәр ябылыуы

Һуңғы ике йылда Рәсәйҙә, шул иҫәптән беҙҙә, оптималләштереү һөҙөмтәһендә бик күп мәктәптәр ябылды. Шуның арҡаһында күпме уҡытыусылар эшһеҙ ҡалды, уҡыусылар күрше ауылдағы мәктәпкә йөрөү уңайһыҙлығы кисерә. Күңелле хәл түгел, әлбиттә. Педагогия университеты ректоры булараҡ, мәктәптәрҙең ябылыуы иң беренсе нәүбәттә миңә лә ҡағыла. Мин үҙемдең хеҙмәтемде был юғары уҡыу йортонан тыш күҙ алдына килтерә алмаған кеүек, минең студенттарым да үҙҙәренең киләсәген мәктәпһеҙ күҙ алдына килтерә алмай.

Бында кемделер ғәйепләү урынына, әйҙәгеҙ, мәсьәләгә төрлө яҡлап ҡараш ташлайыҡ. Әйҙәгеҙ, бер класта бер йәки ике бала уҡыған ауыл мәктәбен күҙ алдына килтерәйек. Йәки булмаһа, башланғыс мәктәптә бер үк класта төрлө класс балалары ултыра һәм уҡытыусы уларға бер юлы төрлө дәрестәр үткәрә икән, ти. Өсөнсө ситуация: тулы булмаған комплектлы ауыл мәктәбенең физика мәктәбе уҡытыусыһы башҡорт теле дәресен дә алып бара, йә булмаһа, рус теле уҡытыусыһы өҫтәмә рәүештә математика, рәсем, хеҙмәт дәрестәре алып бара. Ошондай шарттарҙа беҙ уҡыу-уҡытыуҙың сифаты хаҡында һүҙ алып бара алабыҙмы икән? Әлбиттә, юҡ. Бындай ситуациялар нилектән килеп сыға?

Мәктәп тулы ҡанлы булһын өсөн балалар күп тыуырға тейеш. Яңыраҡ мин Благовар районының Языково ауылында йәмәғәтселек ҡабул итеү бүлмәһендә кешеләрҙе ҡабул иттем. Күберәк уҡытыусылар килде. "Бына минең класта биш бала уҡый, уҡытыусыны ҡалдырып булмаймыни?" ти береһе. Бәлки, ҡалдырырға ла кәрәктер, сөнки уҡытыусылар һаны ҡыҫҡара-ҡыҫҡара барып, мәктәп тә ябылһа, ауылдың да юҡҡа сығыуы бар. Мин бында ата-әсәләргә, йәштәргә мөрәжәғәт итер инем. Ауылда мәктәпте һаҡлап ҡалыр өсөн иң беренсе нәүбәттә ауыл сәнәғәтен аяҡҡа баҫтырырға кәрәк бит. Сөнки ауылда эш урындары булмай тороп, унда һеҙҙең дә, балаларығыҙҙан да киләсәге юҡ. Ауылда бит тик пенсияға ғына йәшәп булмай. Элек тә ауылда тормош еңел булманы, әммә балалар күп тыуҙы. Элек ауылда эш тә ауыр булды, әммә кешеләрҙең ҡураһы тулы мал булды. Хәҙер

✓ *Оптималләштереү, минең аңлауымса, ҡыҫҡартыуҙы йә арттырыуҙы белдермәй, ә бар көстәрҙе, ресурстарҙы бер урынға туплап, дөрөҫ йүнәлеш биреү.*

# АЯҠЛЫ БУЛА, кенә үҫешеү мөмкин

***Ауылда мәктәпте һаҡлап ҡалыр өсөн иң беренсе нәүбәттә ауыл сәнәғәтен аяҡҡа баҫтырырға кәрәк бит. Сөнки ауылда эш урындары булмай тороп, унда һеҙҙең дә, балаларығыҙҙаң да киләсәге юҡ. Ауылда бит тик пенсияға ғына йәшәп булмай. Элек тә ауылда тормош еңел булманы, әммә балалар күп тыуҙы. Элек ауылда эш тә ауыр булды, әммә кешеләрҙең ҡураһы тулы мал булды. Хәҙер иһә ауыл кешеһе илле йәшкә етә лә, мал торорға ла ҡыйынһына башлай. Ә ауылда йәшәүе ҡасан еңел булды икән? Шул уҡ ауылдарыбыҙға хәҙер үзбәктәр килеп, ерҙе арендаға алып, теплицаларҙа йәшелсә үҫтереп, үҙебеҙгә һата, бының менән үҙенең илендәге балаларын, туғандарын ҡарай. Ә беҙ һаман да уларға ҡарап ятабыҙ. Хәҙер ауылда эшләр өсөн элекке кеүек күп тә кеше кәрәкмәй, күп эште техника башҡара.***

иһә ауыл кешеһе илле йәшкә етә лә, мал торорға ла ҡыйынһына башлай. Ә ауылда йәшәүе ҡасан еңел булды икән? Шул уҡ ауылдарыбыҙға хәҙер үзбәктәр килеп, ерҙе арендаға алып, теплицаларҙа йәшелсә үҫтереп, үҙебеҙгә һата, бының менән үҙенең илендәге балаларын, туғандарын ҡарай. Ә беҙ һаман да уларға ҡарап ятабыҙ. Хәҙер ауылда эшләр өсөн элекке кеүек күп тә кеше кәрәкмәй, күп эште техника башҡара. Ә ниңә һаман да ауыл сәнәғәте аяҡҡа баҫмай һуң? Ҡала кешеһе лә башҡаларға һалынып өйрәнгән. Әйтәйек, йорт янында үҙебеҙ тәртип урынлаштырыу урынына беҙ һаман да дәүләт хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итәбеҙ. Ғөмүмән, был - ауыл кешеһе өсөн дә, ҡала кешеһе өсөн дә комплекслы ауырыу мәсьәлә.

Мәктәптәр ябылыуында мин кемделер ғәйепләүҙе дөрөҫ юл тип һанамаҫ инем. Бөгөн объектив рәүештә шундай хәл килеп тыуҙы һәм йәшәйешебеҙҙең социаль-иҡтисади механизмы ауылды емереүгә алып килә. Мәктәптәрҙең ябылыуы ла ошо сәбәпкә бәйле. Әгәр ҙә ауыл сәнәғәте аяҡҡа баҫһа, унда йәштәр киләсәк, йәштәр килһә, балалар тыуасаҡ, балалар тыуһа, ябылған мәктәптәр реанимация үтәсәк һәм кире асыласаҡ. Ә былай ғына итеп мәктәпте япмаҫҡа өндәү ул мәсьәләне бер яҡлы аңлау ғына. Шул уҡ Благовар районының Ҡашҡалаша ауылындағы 9 йыллыҡ мәктәпте, балалар һаны аҙ булыу сәбәпле, башланғыс мәктәпкә әйләндерергә кәрәк. Был ауылда шулай уҡ тулы комплектлы булмаған балалар баҡсаһы бар. Шул уҡ ваҡытта әлеге РФ һәм БР закондары мәктәп менән балалар баҡсаһын бер юридик берәмеккә ҡушырға мөмкинлек бирмәй. Был осраҡта балалар баҡсаһының мөдирен генә ҡыҫҡартырға тура килер ине. Бында тиҙ арала закондарҙы үҙгәртеү зарурлығы килеп тыуа. Бөгөн ауылдар араһына автобустар йөрөтөп, балаларҙы күрше ауылға ташығансы, район үҙәктәрендә интернат-мәктәптәр ойоштороу маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Эйе, ҡапыл ғына интернат өсөн биналар төҙөп тә булмай торғандыр. Әммә һәр бер район үҙәгендә элекке һөнәрселек училищеларының биналарын, ятаҡтарын файҙаланырға була бит. Бәлки, һөнәрселек училищеларын ике районға берәү ҡалдырып, интернат-мәктәптәрҙе зона буйынса ойоштororға кәрәктер. Ҡыҫҡаһы, урындарҙа һүнеп ҡалған тормошто аяҡҡа баҫтырмайынса тороп, киләсәктә мәктәптәрҙе лә һаҡлау мөмкин булмаясаҡ.

## Юғары уҡыу йорттары

Беҙ, юғары уҡыу йорттары ректорҙары, юғары белем биреү системаһының яҙмышы өсөн борсолоп йәшәйбеҙ. Ҡайһы ваҡыт төн йоҡоларынан уянып, тыуған уҡыу йортомда килеп тыуған сираттағы проблеманы хәл итеү юлдарын эҙләп таң аттырам. Эйе, беҙҙе беҙҙең уҡыу йортон тамамлаған студенттарҙың артыҡ күп булыуында ғәйепләйҙәр. Ә мин шуны беләм: бөгөн уҡытыусыларҙың артыҡ булыуы ваҡытлыса ғына күренеш. Ни өсөн тигәндә, 2015-2016 йылдарҙа уҡ уҡытыусылар, бигерәк тә башланғыс класс уҡытыусылары етешмәйәсәк. Бөгөн беҙ балалар баҡсаларында балаларға урын еткерә алмайбыҙ, иртәгәгә был хәл мәктәптәрҙә күҙәтеләсәк һәм иң беренсе нәүбәттә уҡытыусылар етешмәйәсәк. Бында ауылдарҙа мәктәптәрҙе ябып ҡабаланманыҡмы икән, тип тә уйланыла. Бөгөн беҙҙе тамамлаусыларҙың 72 проценты эшкә урынлаша һәм хеҙмәт биржаһында беҙҙекеләр юҡ.

Беҙ үҙ студенттарыбыҙҙы хәҙер эш урындары барлыҡҡа килтерергә өйрәтәбеҙ. Әгәр ҙә беҙҙе тамамлаусы белгес үҙенең һөнәре буйынса эшкә урынлаша алмаһа, ул үҙ эшен аса, эш урындары булдыра ала. Бөгөн беҙҙең студенттар психологик ярҙам үҙәктәре, дизайн студиялары ойоштора, шәхси балалар баҡсалары, шәхси мәктәптәр аса. Улар әлегә күп түгел, әммә яйлап күбәйә бара. Юғары мәктәп иң беренсе нәүбәттә кешене тормошҡа яраҡлашырға өйрәтергә бурыслы. Мәктәптә лә беҙ балаларҙы ололар тормошона яраҡлашырға, ҡулайлашырға өйрәтәбеҙ бит.

Ике урында ла маҡсаттар бер үк төрлө. Шуға күрә беҙ бер туҡтауһыҙ уҡыу программаларын үҙгәртеп торабыҙ. Беҙҙең программалар буйынса бер һөнәр буйынса белем алған белгес ҡыҫҡа ваҡыт эсендәге курс ярҙамында икенсе төрлө эшмәкәрлеккә ҡулайлаша ала. Мәҫәлән, беҙҙең педагогия университетын тамамлаусылар дәүләт хеҙмәтендә лә, нефть компанияһында ла, эске эштәр системаһында ла, федераль именлек хеҙмәтендә лә, наркоконтроль системаһында ла эшләй ала.

## Модернизация - яраҡлашыу

Мин модернизацияны заманға яраҡлашыу тип аңлайым. Мәҫәлән, беҙҙең уҡыу йорто хәҙерге сәйәси, мәҙәни, иҡтисади шарттарға тап килергә тейеш. Аудиторияны ниндәйҙер төҫкә буяу беҙҙең өсөн модернизация һаналмай. Ул иң беренсе нәүбәттә уҡытыусының аң кимәлен үҫтереү һәм үҙгәртеү. Уҡытыусы бөгөн тик лекциялар, тик семинарҙар ярҙамында ғына студентты тормошҡа әҙерләү мөмкин түгеллеген аңларға тейеш. Модернизация - ул яңыса белем биреү программаларын һәм технологияларын уҡыу процесына индереүҙе аңлата. Ундай технологияларға донъя мәҙәниәтенә илтеүсе интернет технологиялар инә. Модернизация - ул кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыусы һәм үҙгәртеүсе, был осраҡта кешеләр араһындағы дөғүәләшеү мөнәсәбәте хеҙмәттәшлек итеү мөнәсәбәтенә үҙгәрергә тейеш.



Яңыраҡ Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтында булып, хайран ҡалдым. Ундағы элекке ҡотһоҙ аудиториялар күҙ яуын алырлыҡ рәүешкә ингән. Унда, асылда, ауыл мәктәптәре уҡытыусылары килә һәм улар ошо аудиториялар фонында үҙҙәренең идеаль класс өлгөһөн күрә.

Оптималләштереү, минең аңлауымса, ҡыҫҡартыуҙы йә арттырыуҙы белдермәй, ә бар көстәрҙе, ресурстарҙы бер урынға туплап, дөрөҫ йүнәлеш биреү. Барлыҡ факультеттарға ла бер үк төрлө лабораториялар һатып алыу ҙа оптималләштереүҙе аңлатмай, бының өсөн барыһы ла ҡулланырлыҡ селтәр булдырырға кәрәк. Оптималләштереү минең өсөн барыһына ла бер иш телевизор һатып алыу түгел, ә барыһы ла инә алырлыҡ ҡеүәтле структураны барлыҡҡа килтереү. Мин оптималләштергәндә ҡыҫҡартмайым, ә киңәйтәм. Минең оптимизацияға Һиндостандың атаҡлы математиктары, Италияның, Американың, Чехияның күренекле ғалимдары инә. Тиҙҙән беҙгә Рәсәйҙең дүрт танылған академигы киләсәк һәм беҙҙең студенттарға һәм уҡытыусыларға лекциялар уҡыясаҡ. Әлбиттә, мин уларға бының өсөн түләргә тейешмен. Шуға күрә мин университет бюджетынан донъяның иң көслө ғалимдарын саҡырыр өсөн сығымдар ҡалдырам. Шул уҡ ғалимдар минең иң тырыш студенттарымды үҙҙәре менән алып китеп, уҡытып, аҙаҡ үҙемә үк ҡайтарып бирәсәк. Был йәһәттән минең өсөн оптималләштереү — башҡаларҙың потенциалын үҙем етәкләгән уҡыу йорто өсөн файҙаланыу ул.

## Хәҙерге студент

Үткән быуаттың һикһәненсе йылдарындағы студент хәҙерге студенттан ҡайһы яғы менән айырыла, хәҙерге студенттар яҡшыраҡмы, әллә - киреһенсәме? Был һорауҙы һәр ваҡыт бирәләр. Мин был һорауға шулай яуап бирәм: яҡшыраҡ та, киреһенсә лә түгел, улар хәҙер бөтөнләй икенсе кешеләр. Бер яҡтан ҡарағанда, хәҙерге студент беҙгә инфантиль рәүештә уҡырға килә. Ул ата-әсәһенең артыҡ иғтибары менән бер аҙ боҙолған була, үҙенә һәр ваҡыт иғтибар талап итә. Ул өмәләргә лә сығырға иренә, хатта үҙ-үҙен хеҙмәтләндереүсе эш менән дә шөғөлләнгеһе килмәй. Улар шулай булырға тейеш тә, сөнки октябряттар, пионер ойошмалары юҡ, комсомол мәктәбе, үҙидара органдары эшләмәй, ата-әсәләр мәктәптә балаларҙың хеҙмәткә йәлеп ителеүенә ҡаршы. Шуға күрә беҙгә уҡырға килеүсе беренсе курс студентының донъяны танып белеүе етенсе-һигеҙенсе класс уҡыусыларыныҡына тиң була. Шул уҡ ваҡытта ул студент аҡыллыраҡ һәм күберәк мәғлүмәткә эйә, унын фантазияһының осо-ҡырыйы юҡ. Мин үҙемдең күп кенә башланғыстарымды тормошҡа ашырыуҙы уларға йөкмәтәм. Әле бына студенттарым 30 апрелдә бер сигнал буйынса ғына бөтә республиканы ағас ултыртырға сығарырға хыяллана. Мин һәр ваҡыт уларҙан энергия, романтика һәм энтузиазм алам.

## Үҙегеҙгә ярҙам итергә…

Беҙҙең университет уҡытыусыһы, психология фәндәре докторы Вадим Фәтхи улы Сафин "Вузда белемде бирмәйҙәр, ә алалар" тип әйтергә ярата торғайны. Ул мине лә уҡытты, яңыраҡ беҙ унын 80 йәшлек юбилейын билдәләнек. Унын был һүҙҙәренә килгәндә, хәҙер юғары уҡыу йортонда ғына түгел, ә мәктәптә лә уҡыусылар белемде алырға тейештәр. Белем биреү һәр ваҡыт белем алыуға, тәрбиә биреү үҙ-үҙенде тәрбиәләүгә әүерелгәндә генә мәғариф эшенең дөрөҫ алып барылыуы хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин. Уҡытыусы, әлбиттә, балаларға белем бирә, әммә яҡшы уҡытыусы белем алырға өйрәтә. Элек бер профессор үҙенең студенттарына шулай тип әйткән: "Үҙегеҙгә ярҙам итергә миңә ярҙам итегеҙ..." Макаренко үҫмер йәштәге енәйәтселәрҙе хеҙмәткә йәлеп итеп, улар донъялағы ул саҡтағы иң яҡшы "ФЭД" фотоаппаратын яһай башлай.

Мин үҙ студенттарымдан бик күп нәмә алам. Сценарий яҙырға ла, мастер исеме алырға ла, конкурстар ойоштороға ла өлгөргән Аня Васильеванан оптимизм алам. Һоҡланғыс йырсы, мейеһендә идеялар ҡайнап тороусы Света Моцартеванан - илһам, күҙҙәре насар күреүгә ҡарамаҫтан, 8 тапҡыр олимпия чемпионы исемен яулаусы Оксана Савченконан - дәрт, һуҡыр һәм һаңғырау булыуына ҡарамаҫтан, Президент стипендиаты булған Вадим Боровиктан сәм алам. Миҫалға башҡорт филологияһы студенттарын ғына алайыҡ. Улар үҙҙәре уйлап сығарып, башҡорт телен интернет аша өйрәнеү буйынса оригиналь методика тәҡдим итте. Уларҙың сценарийы буйынса башҡорт бал ҡорто урыҫ айыуын башҡорт теленә өйрәтә. Нисек уларға һоҡланмайһың инде! "Студент яҙы" фестивале үтте. Унда сәғәт ярым ваҡыт эсендә сәхнәгә беҙҙең 567 студент профессиональ кимәлдә сығыш яһаны. Беҙҙә баллы рейтинг системаһы эшләй һәм шул күрһәткестәр буйынса шул 567 студент уҡыуҙа ла алдынғы. Студенттарҙы әрләргә, битәрләргә (хатта урынлы булғанда ла) ярамай, уларға дөрөҫ йүнәлеш кенә бирергә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай мәшәҡәттәр, уй-хыялдар менән йәшәй уҡытыусылар әҙерләүсе уҡыу йорто һәм унын ректоры. Бер яҡтан уйлағанда, тап педагогтар әҙерләүсе юғары уҡыу йорто шундай булырға тейештер ҙә. Сөнки шәхес тәрбиәнән, ә тәрбиә ғаиләнән һәм мәктәптән башлана. Киләсәктә булаcаҡ ата-әсәләр ҙә иң тәүҙә ғаиләлә һәм мәктәптә белем ала, тәүге әҙерлекте лә улар ошонда үтә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, уҡытыусылар әҙерләүсе юғары уҡыу йорто хәҙерге заманда тормошобоҙҙоң нигеҙ ташын һалыусыларҙы әҙерләй. Тимәк, бындай уҡыу йортон башҡаса төрлө итеп күҙ алдына ла килтереп булмай.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

***✓ "Спектакль"дән һуң Замир, әлбиттә, өйгә лә инеп тормаҫтан, эше буйынса китте. Бәлки, тағы ла ҡыҙҙар ауларға киткәндер, кем белә инде. Ошо көндән алып Зәлифә уны башҡаса бер ҡасан да күрмәне һәм күргеһе лә килмәне.***



Кисәнән бирле йүнләп ашамаған Зәлифә туйғансы ашап алды. Сығырға рөхсәт булмаһа ла, ярай әле, ашау ирекле. Унан кухняның икенсе яғына ҡарай асылған тағы бер йоҡо бүлмәһенә башын тығып ҡына ҡараны. Унда ла иҙән уртаһында теге бүлмәләгенә ҡарағанда бер аҙ тарыраҡ карауат тора. Алтын төҫөндәге, йылҡылдап торған ниндәйҙер ҡалын, матур туҡыманан япма йәйелгән. Тәҙрә тапҡырында - көҙгөләй йылтыр көрән таҡтанан яһалған эш өҫтәле. Унда өс телефон һәм өҫтәл лампаһы. Был бүлмәгә лә инергә ярамағанлығын Олег иҫкәртеп ҡуйғайны.

Ул көн Зәлифәне башҡаса бер кем дә борсоманы. Хатта Замир үҙе лә. Иртәгеһен күҙебашы буялған, оса тәңгәленән генә булған ҡыҫҡа күлдәк кейгән утыҙ йәштәрҙәге бер ҡатынды эйәртеп, Олег килеп инде.

-Заря, - тип таныштырҙы ҡатын үҙен.

-Был һинең көсығыш бейеүҙәре буйынса инструкторың. Уның һәр өйрәткәнен отоп алырға тейешһең, - тине Олег ҡыҫҡа ғына.

-Мин бейеүгә өйрәтергә һорамағайным...

-Был Замир Артуровичтың бойороғо, - тине лә Олег ишектән юҡ булды.

Ниндәй милләттән икәнлеген ҡапылда айырып булмаған Заря кинофильмдарҙағы һымаҡ ҡыланып, янбаштарын унда-бында уйнаҡлатып, Зәлифә янына килде. Башҡорт ҡыҙының теҙенә ҡәҙәре төшөп торған сөм-ҡара толомон ике ҡуллап тотҡолап, телен сыҡылдатып, бер килке һоҡланып ҡарап торғандан һуң, "Шә-әп!" тип ҡуйҙы. Буялған оҙон тырнаҡлы ҡулдары менән Зәлифәнең эсен, арҡаһын, янбаштарын һыйпап ҡараны ла, "годится", тип өҫтәне. Буласаҡ уҡыусыһының буй-һынын "тикшереп" бөткәс, аяғын аяҡҡа һалып, өҫтәл янындағы креслоға йәйелеп ултырҙы ла, кескәй күн сумкаһынан тәмәке һәм зажигалка сығарып, көйрәтеп ебәрҙе. Үҙен бик тә иркен тотҡан "мадам" был бүлмәлә тәүге тапҡыр түгел ине, булһа кәрәк.

Үҙе тәүҙә сисенеп ташлап, купальникта ғына ҡалған Заря Зәлифәне лә уның артынан ҡабатларға бойорҙо. Бер аҙ ҡыйынһыныуына ҡарамаҫтан, Зәлифә был юлы ҡаршылашып торманы. Тәүге дәрес дөйөм гимнастиканан башланды. Ҡул, муйын, бил һәм аяҡтарға бер аҙ күнекмә яһап алғас, Заря, өйрәнгән хәрәкәт менән шкафты асып, унан пластмасса ҡулса килтереп сығарҙы. Унан үҙе шул түңәрәкте бил тәңгәленә кейеп алды ла, ҡулсаны әйләндерә башланы. Мәктәптә физкультура дәресендә уҡытыусы апай уларҙы бындай күнекмәләр яһарға ҡасандыр өйрәтеп тә маташҡайны, әммә Зәлифә бер ни ҙә өйрәнә алманы.

Бер-нисә көндән, ҡулсаны бер аҙ үҙләштергәс, Заря Зәлифәне "атларға" өйрәтергә тотондо.

-Нисек атлайһың һин, дерёвня, - тине ул, бала саҡтан һәр өлкәлә, шул иҫәптән йөрөшөндә, кәүҙә тотоуҙа әҙәп һаҡлап өйрәнгән йәш ҡыҙҙы бер аҙ мыҫҡыл итеп алырға ла тартынманы. Ҡатын кешенең атлауы нисегерәк булырға тейеш икәнен аңлатып, тағы бер сәғәт уҙғарҙы. Уның өйрәтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ, ир-ат затын йәлеп итер өсөн, уйнаҡлатыр ерҙәрен уйнаҡлатып, иркенләп атлап йөрөргә тейеш...

Бейергә өйрәнеү дәрестәре көн дә ҡабатланды. Ныҡышмал ҡатын Заря, ваҡыты-ваҡыты менән Зәлифәне әрләй-әрләй өйрәтә ине. Әрләгәндә һәр төрлө урыҫсалап һүгенеү һүҙҙәрен ҡулланырға ла тартынып торманы. Бер ай тирәһенән Зәлифә инде янбашын биле тирәләй "өйөрөлтөп", ҡәҙимге сәхнәгә сығып бейерлек булып өйрәнеп алды. Ахырҙа, уға был бейеү бер аҙ оҡшай ҙа башланы хатта. Тик ни өсөн уны бейетәләр ҙә бейетәләр икән... Зәлифә бер ни ҙә аңламаны. Зарянан һорашыу ҙа бер ниндәй һөҙөмтә бирмәне, тиерлек. Сөнки уның "ҙур начальник алдында бейейәсәкһең", тигән яуабын шаяртып әйткән һымаҡ ҡабул итте. Начальниктар өсөн ысын артистар бөткәнме икән ни, тип уйланы. Бер айҙан Зәлифәгә тағы бер дәрес өҫтәлде. Дөйөм массаж. Массаж дәрестәрен дә Заря алып барҙы. Бәхеткә, зирәк ҡыҙ икеөс аҙна тирәһендә ярайһы уҡ оҫта массажсы ла булып китте...




Шул ваҡыт эсендә уның Замиры бер мәртәбә лә килеп күренмәне. Ире тураһында һорашыу ҙа тыйылғас, төндәр буйы илап, таңға ҡарай күҙҙәре шешенеп бөтә ине. Тәүҙәрәк ул тик Замирын өҙөлөп һағынды, күбеһенсә шуның өсөн йәш түкте, ә тора-бара ата-әсәһен дә һағынып илар булып китте. Уларға бер ни ҙә кәңәш итмәйенсә, үҙ белдеге менән Замирға тормошҡа сығып китеүенә үкенде. Әсәһе уның хаҡында ишетһә, нишләр ине икән. Тәүҙәрәк, ире ана ҡайта - бына ҡайта, тип өмөтләнгән йәш ҡатын, һуңға табан, Замир үҙе килеп күренгәс тә, бар уйлағандарын уның йөҙөнә бәреп әйтеп, был йорттан сығып китергә, тигән ҡарарға килде. Әммә иренең иртәгә лә, унан һуң да ҡайтыуына көндән-көн өмөтөн өҙә барған Зәлифә уның берҙән-бер тигәндәй танышы, йә иһә яҡыны - Олег менән булһа ла ҡырҡа һөйләшеп алырға булды.

Һуңғы осорҙағы ана шундай йоҡоһоҙ төндәренең береһенән һуң, ял көнө Зәлифә телефон трубкаһын алды.

-Мин һеҙҙе тыңлайым, Зоя, - тине Олег оҙаҡ көттөрмәй. - Ниндәй проблемаларығыҙ бар?

-Миңә Замирҙы күреп һөйләшергә кәрәк, - тине Зәлифә, ҡысҡырып илап ебәреүҙән көскә тыйылып.

- Уның менән һөйләшеү мөмкин түгел, - тине Олег.

-Ни өсөн? Ул минең ирем түгелме әллә?..

-Ул оҙайлы командировкала. Икенсенән, ул һеҙҙең ирегеҙ түгел...

-Нисек инде - минең ирем түгел? - Ҡысҡырып иларға тотондо йәш ҡатын. - Ә ай ярым элек кем минең менән ЗАГСта яҙылышты һуң?

-Был телефон аша һөйләшә торған һүҙ түгел. Әгәр теләгегеҙ булһа, мин берәр сәғәттән һеҙҙең янға инермен. Аңлашырбыҙ.

Бер сәғәттән, ишекте тыштан асҡыс менән үҙе асып, Олег килеп инде. Ҡулына күн дипломат сумаҙан тотҡан. Ул бер ни ҙә өндәшмәй, дипломатын өҫтәлгә ҡуйып, асып ебәрҙе.

-Мә, Зоя, былар - һиңә. - Олегтың йөҙөндә, ғәҙәттәгесә, бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр һиҙелмәне.

Зәлифә яҡыныраҡ килеп, асыҡ дипломатҡа баҡты. Унда тиҫтәләгән пачка Ленин бабай һүрәтле ҡыҙыл ун һумлыҡтар ине.

- Миңә?.. Ә ни өсөн?

- Яҡшы тәртибең өсөн аванс, - тине Олег. -Тыйнаҡлығың өсөн, тыңлаулы булғаның өсөн, - тип өҫтәне.

-Әгәр ҙә тыңлаулы булмайынса, мине бында әсир хәлендә тотҡан өсөн милицияға хәбәр итһәм, ни эшләтерһегеҙ? - Ҡыҙҙың асыуы ҡабарғандан- ҡабара барҙы. Бер ҡасан да, бер кемгә лә улай асыуланғаны юҡ ине.

-Ул саҡта бына ошо фотолар ата-әсәйегеҙгә, туғандарығыҙға, яҡындарығыҙға яңылыш ҡына барып эләгәсәк... - Олег кеҫәһенән бер-нисә фотоһүрәт сығарып, Зәлифәнең алдына һалды. Фотоларҙы күреү менән йәш ҡатындың йөрәге дарһылдап тибергә тотондо, сәстәре үрә торҙо: ғүмерендә лә күрмәгән хәшәрәт картиналар ине улар. Шәп-шәрә Зәлифәнең әллә нисә партнер менән енси мөнәсәбәте төшөрөлгән был ялған фотоһүрәттәр оригиналдан бер нәмәһе менән дә айырылмай ине... Ул ҡысҡыра-ҡысҡыра фотоларҙы берәм-һәрәм йыртҡыларға тотондо.

-Ҡәбәхәттәр! - тип ҡырағай тауыш менән ҡысҡырып, ул Олегҡа ташланды. Ҡулдарын йоҙроҡҡа төйнәп, уны дөмбәҫләргә тотондо.

-Йә, етер, истеричка! Не ты первая, не ты - последняя! - тине Олег урынынан тороп ҡағына-ҡағына. - Я тут не причем. Мин тик бойороҡто ғына үтәп йөрөүсемен. Замир менән никахығыҙ хаҡында онот. Никахығыҙ бер ҡасан да булманы. Ғөмүмән, Замирҙы онот. Уны башҡаса бер ҡасан да күрмәйәсәкһең. Әйткәндәй, ал паспортыңды. - Олег кеҫәһенән сығарып, Зәлифәгә паспортын һуҙҙы. - Замир Артурович документығыҙҙы бысратып тороуҙы кәрәк тапманы. Ышанмаһағыҙ - ҡарағыҙ. Һеҙ - абсолютно буйҙаҡ ҡатын... Хужағыҙ хәҙер бөтөнләй башҡа кеше. - Олег һуҡ бармағын юғары күтәреп, өҫтәп ҡуйҙы:

-Ҙу-ур кеше. Был йорт - уның дачаһы. Ул һеҙҙең өсөн шулай уҡ ҙу-ур аҡсалар түләгән. Ә йыртылған фотоларҙың башҡа даналарын яңынан йөҙәрләгән дана яһауы бер ни ҙә түгел икәнен аңлатып тороуҙың кәрәге юҡтыр, тип уйлайым. Хушығыҙ...

Зәлифәнең паспортын өҫтәлгә һалып, ишекте ҡаты ябып, Олег сығып китте.

-Ҡәбәхәттәр! - ҡысҡырып илай-илай Зәлифә ишекте ҡулдары, аяҡтары менән дөбөрҙәтте, хәле бөтөп, балаҫҡа йөҙ түбән ауҙы...

* * *

Нисек кенә ауыр булмаһын, Зәлифә тәҡдиренә бойһоноп, ошо хәленә бер аҙ күнегә башлағандай ҙа булды. Бейеү дәрестәре артабан да дауам итте. Заря хатта ҡайһы саҡта Зәлифәне уңыштары менән маҡтап та ала ине. Тиҙҙән имтихан буласағын да, оҙаҡламай уның ысын эше башланырын да әйтте. Тик тыштан ҡарағанда ғына үҙенең ошо сетерекле хәле менән бер аҙ килешкән һымаҡ күренгән Зәлифә, ысынында иһә, ошо ҡапҡанға килеп эләккәненә ҡайғырып, төндәрен йәш түкте. Көндөҙ белгертмәҫкә тырышты. Сөнки уның иң ҡурҡҡан нәмәһе - әлеге порнофотоһүрәттәр ине. Берәйһе генә булһа ла туғандарына барып эләкһә, был донъяла йәшәүҙең мәғәнәһе ҡалмаясаҡ уға. Фотолар ялған булыуға ҡарамаҫтан...

"Замирҙы башҡаса күрмәйәсәкһегеҙ", тиһә лә, бер көн ҡулына ҙур ғына сумка тотоп, Зәлифәнең бүлмәһенә Олег килеп инде.

-Кейенегеҙ, - тине ул ҡырҡа ғына. - Хәҙер Замир килә. Һеҙгә бөгөн өлгөлө ғаилә башлығының бәхетле кәләше ролен уйнарға тура киләсәк. Алдан иҫкәртеп ҡуям: без никаких фокусов!

- Ни эшләргә тейешмен мин?

-Бына ошо сумкала затлы кейемдәр. Күңеленә ятҡанын һайлап ал. Сәсеңде рәткә килтер. Һеҙ бөгөн Замир менән элек йәшәгән дөйөм ятаҡҡа барып, ҡыҙҙарығыҙҙы ресторанға саҡырап, хөрмәт күрһәтәсәкһегеҙ. Яҙмышығыҙға зарланғандай бер һүҙ ҙә сығырға тейеш түгел. Йөҙөгөҙҙә бәхетле йылмайыу балҡырға тейеш. Мине дөрөҫ аңлағанһығыҙҙыр, тип ышанам. Теге фотоларҙы бер генә минутҡа ла иҫегеҙҙән сығармағыҙ...

Бәхетле йәш ҡатын ролен уйнауы Зәлифәгә ифрат та ауыр булды, әммә ул үҙенең ошо вазифаһын урын-еренә еткереп, тейешенсә башҡарҙы, буғай. Шундай ролдәрҙе уйнап өйрәнгән "ғаилә башлығы отличнигы" Замирға ҡарап, әхирәттәренең таң ҡалыуы, "бәхете ярҙарынан ташып барған" Зәлифә өсөн бер аҙ көнләшеү ҡатыш шатланыуҙары - барыһы ла бик тәбиғи килеп сыҡты. Бының ни өсөн Замирға кәрәк булыуын аңламаҫҡа Зәлифә хәҙер инде элекке ябай ауыл ҡыҙы түгел. Әхирәттәре уны эҙләп, даулап йөрөмәһендәр өсөн эшләнгән тамаша булды был. Зәлифәне оҙаҡ ваҡытҡа юғалтҡан хәлдә лә, һис юғында, "эреләнеп, беҙҙе һанға һуҡмай, шунлыҡтан килеп күренмәй", тиәсәктәр. Уның тураһында һорашҡан ата-әсәһенә лә шулай тип әйтәсәктәр.

"Спектакль"дән һуң Замир, әлбиттә, өйгә лә инеп тормаҫтан, эше буйынса китте. Бәлки, тағы ла ҡыҙҙар ауларға киткәндер, кем белә инде. Ошо көндән алып Зәлифә уны башҡаса бер ҡасан да күрмәне һәм күргеһе лә килмәне. Олег машинаһын уратып-уратып алып килгәнгәме, Зәлифә, күпме генә тырышһа ла, юлды бер нисек тә хәтерләп ҡала алманы. Хәйер, хәтерләгән хәлдә лә, хатта ҡалаға иркенләп сығып йөрөргә рөхсәте булған көндә лә, ысынбарлыҡта уның аяҡ-ҡулдары бығаулы ине. Эйе, бығауҙың да ниндәйе!

Бер көн Олег Зәлифәнең ата-әсәһе менән ҡыҙыҡһынды.

-Атай-әсәйеңә ҡасан һуңғы мәртәбә хат яҙҙың? - тип һораны Олег.

-Замирға кейәүгә сыҡмаҫтан алда. Ә һиңә нимәгә ул?

-Яҡшы түгел, Зоя, яҡшы түгел. Атай-әсәйҙәргә һәр саҡ хат яҙып торорға кәрәк. Әсәйең бит һине күкрәк һөтөн имеҙеп үҫтергән, һинең өсөн хафаланалыр бит. Ҡыҫҡаһы: бөгөн үк ултырып хат яҙырға тейешһең. Замирға тормошҡа сыҡҡаныңды ла, уның менән бик яҡшы, етеш донъя көтөп йәшәй башлағаныңды ла яҙырға онотма. - Ул тағы кеҫәһенән бер-нисә фотография сығарып бирҙе. - Бына һеҙҙең кейәү егете менән төшкән туй фотолары. Иҫтәлеккә шуларҙы ла һалып ебәр. Тик артыҡ нәмә яҙмаҫҡа кәрәклеге хаҡында иҫкәртеп тороуҙың кәрәге юҡтыр, тип уйлайым. Хатың башҡорт телен белгән тейешле кеше аша үтәсәк. Ғөмүмән, атай-әсәйең менән тейешенсә хат алышып тор...

**(Дауамы бар).**

✓ *Бейеү түңәрәгенә йөрөгән балаларҙың яртыһының "ҡолағына айыу баҫҡан", улар ритм тигән нәмәне тоймай. Бының сәбәбе - балаларыбыҙҙың тәбиғәт ритмынан ситләшеүе.*



ЙӘШТӘР ҠОРО

# ҮҘЕҢ БУЛЫП ЙӘШӘҮ ӨСӨН...

## үҙ мөхитеңдә тәрбиә ал

(Башы 6-сы биттә).

### Иң "цивилизациялы" илдәрҙең аҙғынлыҡҡа батыуы һәм үҙҙәрен үлемгә дусар итеүе

**Зөһрә.** Көнбайыш дәүләттәре, беҙ либералдар, беҙҙә һүҙ азатлығы, дин иреге, тип һүҙ ҡуйырта. Йәнәһе, улар бар кешеләргә лә тиң хоҡуҡ бирә. Ләкин ысынбарлыҡта унда рухи ҡиммәттәр тулыһынса инҡар ителә. Ирек тигәндәре, аҙғындарға ғына юл асып, кеше, традицион ғаилә, йәмғиәт ҡиммәттәрен ҡыҫырыҡлауға ҡайтып ҡала. Чарльз Дарвин уйлап сығарған алдаҡ эволюция теорияһына ышанып, беҙ маймылдан килеп сыҡҡанбыҙ, тип ҡайһы бер кешеләр хайуан кимәленә төшөп бөтөп бара. Уларҙа хайуан булмышы өҫтөнлөк итә, улар кеше иң камил йән эйәһе булыуы хаҡындағы хәҡиҡәтте онотоп, аҡыл, зауыҡ бирелмәгән йән эйәләре ҡылыҡтарын ҡабатлай. Беҙҙең юл башҡа булырға тейеш, беҙ хайуан кимәленә төшөргә тейеш түгелбеҙ.

**Вәсил.** Кешенең тәбиғәтенә ғаилә ҡороп, балалар үҫтереү тигән ихтыяждар һалынған. Аңлы кешеләр һау бала тыуҙырып, нәҫелде дауам итеү ниәте менән йәшәйҙәр. Ошо ғаилә традицияларын боҙоп, туҙға яҙмаған ғаиләләр ҡороусы аҙғындарға нимә етмәй икән? Ир менән ҡатын нәҫел дауам итһен өсөн яратылған, ә ошо ҡоролошто боҙоп, бер төрлө енеслеләр ғаиләләре ишәйә башлаһа, был халыҡтарҙың, дәүләттәрҙең башына кисектерелмәй бәлә киләсәк. Бындай халыҡтар үлемгә дусар.

**Данил.** Кешелек ислам юлына баҫһа, Ҡөрьән, хәҙистәрҙә иҫкәртелгән күп ваҡиғалар тормошҡа ашһа ғына ошо яманлыҡтарҙан арына ала. Тап диндә генә төрлө бәләләрҙән ҡотолоу ҡулланмаһы ята. Тик кеше һаман да уйланмай.

**Зөһрә.** Башҡа диндәр рухи донъяға ғына иғтибар бирһә, ислам кешенең бөтә йәшәйешен күҙаллай. Социаль өлкә, иҡтисад, сәйәсәт, ил башлығы ниндәй булырға тейешлеге хаҡында ла әйтелә унда. Йәғни, Ҡөрьән-Кәримдә бар ғәҙеллек ҡәғиҙәләре теркәлгән. Шуға күрә лә күп дәүләт башлыҡтары үҙ ҡулдарында булған власты һәм байлыҡты юғалтмау маҡсатында исламды төрлөсә ҡараларға тырыша. Ундайҙар кешенең төрлө хәлдәр ҡоло булып ҡалыуын теләй, яҡшы йәшәй һәм үҙ хоҡуҡтарын ҡайғырта башлауынан ҡурҡа.

### Кеше алдына ҡуйылған кәртәләр һәм уларҙы емереп үтеү тураһында

**Вәсил.** Кеше берәй нәмә эшләйем тиһә, уға төрлө кәртәләр ҡуйыла. Һин быны эшләй алмайһың, ҡулыңдан килмәй, был ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ буйынса ғына тормошҡа ашырыла һ.б. Мин үҙемә ундай кәртә ҡуйыуҙан һәм ҡуйҙырыуҙан йыраҡлашырға тырышам, үҙ көсөмдә икеләнеү тыуҙырасаҡ һүҙҙәрҙән дә ситләшәм. Бер нисә йыл элек ҡаяға үрмәләү спорты менән шөғөлләнә башланым. Ике йыл эсендә Рәсәй кимәлендә призер булып, спорт мастерлығына кандидатлыҡ яҡланым. Ҡайһы берәүҙәр, тиҙ арала ошондай уңышҡа нисек өлгәштең, тип аптырап һорағанда, мин былай тип яуап бирәм: "Сер бик ябай - ошо спорт төрө менән шөғөлләнә башлағас, кешеләргә мөрәжәғәт итмәнем, уларҙың фекерен һорашып йөрөмәнем". Сөнки кешеләрҙән кәңәш һораһаң, улар, һис шикһеҙ, мине булған көсөмдә шикләнергә мәжбүр итерҙәр, килеп сыҡмаҫ, ҡыйын спорт төрө, тип унан төңөлдөрөрҙәр ине.

**Данил.** Ғәҙәттә ауылдарҙа кешеләр үҙ алдына үҙҙәре ошондай кәртәләр ҡороусан була. Йәнәһе, яҡшы уҡыу йорттарына беҙ инә алмайбыҙ, яҡшы эшкә танышлыҡ аша ғына урынлашып була. Был ҡараш сәйәсмәндәр, ауыл кешеләрен ауылда ғына торғоҙоп ҡалдырырға тырышҡан кешеләр тарафынан тыуҙырыла, тип уйлайым. Икмәк, ит кәрәк бит инде, уны етештереүсе эшсе ҡулдар ҙа кәрәк. Шуға күрә лә ауыл кешеһен сикләргә тырышыу көслө. Бәлки, ул кешенең белем алғыһы, башҡа төрлө өлкәлә уңыш ҡаҙанғыһы киләлер. Әммә уға бәләкәйҙән, төрлө юлдар аша ҡулынан был эш килмәйәсәге һеңдерелә.

**Зөһрә.** Уйлап ҡараһаң, Эйнштейн мәктәптә насар уҡыған. Уға ла бар яҡлап төрлө кәртәләр ҡуйғандар, уның бер нәмәгә лә өлгәшмәйәсәге хаҡында даими иҫкәртеп торғандар. Ләкин шуға ҡарамаҫтан, ул ҙур ғилми асыш яһаған. Бетховен бәләкәй сағында уҡ һаңрау ҡала. Ләкин күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, бөйөк композитор булып китә. Шуны әйткем килә, кеше шәхес булараҡ көслө икән, ул бер ниндәй ҡыйынлыҡтарға, кәртәләргә ҡарамайынса, үҙ юлын табасаҡ, уңышҡа өлгәшәсәк. Шулай ҙа балаға һәләте булған өлкәлә шөғөлләнергә, камиллашырға ҡамасауламаҫҡа, хыялына көлөп ҡарамаҫҡа кәрәк.

**Данил.** Бар нәмә лә хыялдан башлана. Шул уҡ ваҡытта хыял янында хәрәкәт, эшләнгән эш йәнәш барырға тейеш. Иртәгә уңышлы буласағың хаҡында уйланып, тик кенә ятһаң, тормошта бер нәмәгә лә өлгәшмәйәсәкһең. Эште иртәгәгә ҡалдырыу - ул үҙеңдең хыялыңа хыянат итеү ул. Маҡсат ҡуйып, уға табан ынтылырға кәрәк. Үткән йәй мин стрит фаркаут тигән урам спорты менән шөғөлләндем. Был спорт мине маҡсат ҡуйырға һәм шул маҡсатҡа өлгәшергә өйрәтте. Әгәр июнь башында ябыҡ, көсһөҙ генә булһам, август аҙағында мускулдар үҫеп китте. Турникта бер нисә йыл буйы өйрәнә алмай йөрөгән элементтарҙы ике ай эсендә үҙләштерҙем. Шуның кеүек, хыял, шунан маҡсат, аҙаҡ уңыш буласаҡ.

### Мин һайлаған һөнәр

**Ғәлиә.** Хәҙер төрлө дәүләттәр араһында сиктәр асылған, төрлө милләт вәкилдәре үҙ-ара аралаша ала. Ләкин әлегә күптәр сит телдәрҙе белмәй. Ә беҙҙең гимназияла уҡыған балалар инглиз телен яҡшы үҙләштерә. Быға беҙҙең башҡорт телен яҡшы белеүебеҙ ҙә булышлыҡ итә. Шуға ла мин киләсәктә тәржемәсе һөнәрен һайларға уйлайым.

**Зөһрә.** Беҙҙең яҡшы шағирҙарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ бар. Әммә башҡа милләттәр башҡорт телен белмәүе арҡаһында был әҫәрҙәр менән таныша алмай. Кем белә, бәлки, беҙҙең әҙиптәрҙең ижадтары башҡа халыҡтарға таныш булһа, уларҙы ла Гете, Пушкин, Толстой кеүек ҡабатларҙар ине. Шулай уҡ төрлө ҡитғалар араһында сиктәр бөтмәгәндә, дәүләттәр араһында даими рәүештә диалог барғанда, дипломат һөнәренә ихтыяж ҙур. Киләсәктә мин үҙемде дипломат итеп күрәм.

**Данил**. Биш университетҡа документтарымды тапшырасаҡмын. Маҡсатым инженер булыу. Ләкин киләсәктә инженерлыҡ менән генә сикләнеп ҡалмайынса, үҙемдең шәхси эшемде лә асырға уйым бар.

**Вәсил.** Медицина һөнәрен үҙләштерергә ниәтләнәм. Был һөнәр эйәһе ҙур аҡса эшләмәһә лә, дауалаған кешеләрҙең рәхмәтенә лайыҡ була. Рәхмәттән дә ҙурыраҡ сауап булыуы мөмкинме!

### Тормошҡа ҡанаттар ҡуйған гимназиябыҙ

**Зөһрә.** Беҙҙең гимназияны асыу өсөн тырышып йөрөгән Рәми Ғарипов, башҡа апай-ағайҙар уның Өфө һәм Башҡортостан өсөн оло әһәмиәтен аңлағандыр. Ҡырҡ йыллап бында башҡорт интеллигенцияһының балалары белем алған, мәктәпте тамамлаған билдәле кешеләр күп. Бөгөн дә милләтенең киләсәге өсөн ҡайғырған ата-әсәләр, ҡаланың ниндәй генә өлөшөндә йәшәмәһендәр, балаларын 20-се гимназияға бирергә тырыша. Был хуплауға ғына лайыҡ.

**Ғәлиә.** Гимназияла уҡытыу-тәрбиә эше яҡшы ҡуйылған. Уҡыусыларға камиллашыу өсөн бар шарттар тыуҙырылған, тип уйлайым. Шәхсән үҫеш өсөн төрлө түңәрәктәр, "Шаяниум" һәм башҡа конкурстарҙа ҡатнашыу бик әһәмиәтле.

**Данил.** Үҙемдең миҫалдан алып әйткәндә, былтыр "Шаяниум"да, "Шаян уйын"да ҡатнашыуым шәхсән үҫешемә ҙур этәргес булды. Үҙ-үҙемә ышанысты арттырҙы. Ғөмүмән, башҡорт гимназияһында, башҡорт мөхитендә уҡыуҙың, тәрбиә алыуҙың өҫтөнлөктәре бик ҙур, тип иҫәпләйем. Һин был донъяла үҙең булып йәшәргә, үҙеңсә һөйләшергә, үҙ йолаларыңды тоторға, үҙеңсә уйларға, фекерләргә тейешһең. Беҙҙең гимназия тап ошо ҡиммәттәрҙе һеңдерә, тәрбиәләй балаларҙа. Ул шуныһы менән ҡиммәт беҙгә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡы өсөн көйгән, уның киләсәге өсөн борсолған, даими рәүештә камиллашҡан кеше генә үҙ милләтенә, дәүләтенә файҙа килтерә ала. Битарафлыҡ, вайымһыҙлыҡ бер кешенең генә бәләһе түгел, ә бар йәмғиәткә ҙур фажиғә менән янай. Туған телде, мәҙәниәтте өйрәнгәндә генә үҙеңдең нәҫелеңде һәм тамырҙарыңды онотмаясаҡһың. Әле Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт ҡала гимназияһы уҡыусылары ошо хәҡиҡәтте еткерҙе. Ҙур һәм шаулы Өфө, тарая барған донъя ығы-зығыһында башҡорт халҡы юғалып ҡалмауын һәм киләсәккә ышанысты атлауын теләүсе милләттәштәребеҙ үҙ балаларын ошондай мәктәптәрҙә уҡытыуҙы хәстәрләргә тейеш, тигәнгә ишара булды был һөйләшеү.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЗАМАН РИТМЫНА БАҪҠАНДА...

## тәбиғи ритмды онотмайыҡ

**Динислам ИСҠУЖИН, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Баймаҡ ҡалаһы:** Заман ауыр, тип зарланып ултырырға түгел, ә уға яраҡлашыу сараһын күрергә кәрәк беҙгә. Милләттәштәребеҙ донъяла, дәүләтебеҙҙә һәм илебеҙҙә барған яңылыҡтарҙы үҙләштереп, фән, техника, сәнғәт һәм ижтимағи тормоштағы яңылыҡтарға ҡолаҡ һалып, заманса фекерләргә, берәй ойошмаға нигеҙ һалып, үҙ артынан йәштәрҙе эйәртеп йәшәргә тейештер, минеңсә.

Баймаҡ мәктәп-интернатында бейеү түңәрәген етәкләгәс, башлыса ауылдарҙан килгән балалар менән аралашам. Беҙҙә белем алған күп балалар ата-әсә наҙынан мәхрүм, кемеһенеңдер ата-әсәһе эскелектән айный алмай. Беҙ бит кеше, әҙәм заты, ауыр саҡта туғандарыбыҙҙан башҡа бер кемгә лә ярҙам өмөт итеп бара алмайбыҙ. Шуға, милләттәштәр, иң тәүҙә туғанлыҡ ептәрен үҙебеҙ нығытайыҡ. Әлеге лә баяғы, балаларҙан сығып ҡарайыҡ: атай ҡарамағында үҫкән ҡыҙҙар менән сағыштырғанда, атайһыҙ үҫкән ҡыҙҙарҙың донъяға ҡарашы, башҡалар менән аралашыу үҙенсәлектәре, хис-тойғолары сағылышы, хатта бейеүе, йырлауы, атлап йөрөшө лә һиҙелерлек айырыла. Ҡыҙҙар өсөн атай терәге, атай иңе кәрәк. Ҡыҙым Раушания, мәҫәлән, кейәүгә сыҡҡансы минең яндан өҙөлмәне. Кинйә улым Юлайҙың иһә, киреһенсә, әсәһе менән һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Нимә әйтергә теләгәнем аңлашылалыр - ғаиләнән үк бер-береңде тартырға, бәпләргә кәрәк. Ғаиләләр ныҡ була икән, ауыл-ҡалалар ҙа ышанысты йәшәйәсәк, алға барасаҡ. Гуманизм, әхлаҡлылыҡ нигеҙҙәре лә, ҡанундар ҙа эшләһен, дәүләтебеҙгә, халҡыбыҙға файҙа килтерһен, тиһә, дәүләтебеҙгә, йәмғәтселеккә тап ғаилә институтын нығытырға кәрәк.

Иғтибарҙы тағы бер мәсьәләгә йүнәлтмәү мөмкин түгел. Әгәр хәлдәр былай барһа, яҡын киләсәктә беҙҙең халҡыбыҙға бейеү сәнғәтенән алыҫлашыу ҡурҡынысы янай. Барыһы ла, әлеге лә баяғы, компьютер менән самаһыҙ оҙаҡ, тыйыуҙарһыҙ файҙаланыуға ҡайтып ҡала. Дөрөҫөрәге, шундай шәп, ҡәҙерен белгән кеше өсөн гениаль әйберҙе бөгөн балаларыбыҙ бары тик уйын уйнау, бөтөнләй кәрәкмәгән "донъя ғәйбәте" менән танышыу сараһына әйләндерҙе. Күңелде ҡырғаны шул - минең бейеү түңәрәгенә йөрөгән балаларҙың яртыһының "ҡолағына айыу баҫҡан", улар ритм тигән нәмәне тоймай. Бының сәбәбе - балаларыбыҙҙың тәбиғәт ритмынан ситләшеүе. Элек беҙҙең ауылда кешеләр иртәнге әтәстәр ҡысҡырһа - тора, кис етеп, әтәстәр тағы ҡысҡырышһа - йоҡларға ята, уның ҡарауы, бөтәһе лә бейеүсе ине. Балаларының киләсәгенә иғтибарлыраҡ булһын ине ата әсә. Тәбиғәт ритмынан ситләшеү бейеүҙән, йырҙан ғына түгел, ә кешелектең күркәм сифаттарынан, шулай уҡ беҙҙең заман өсөн ҡәҙимге тойолған, әммә башҡа халыҡтар өсөн буй етмәҫлек булып күренгән ябай ғына белемдәрҙән ситләшеүгә килтереүе бар. Һүҙемде йомғаҡлап, шуныһын да әйтке килә: бөгөн сәнғәт донъябыҙ үҫә, байый ул. Мин тәрбиәләгән йәштәрҙән генә сығып ҡарағанда ла, уларҙың күптәре республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә үҙ ансамблдәрен төҙөнө. Талантарын күреп, уларҙы эшкә алған урындағы етәкселәргә рәхмәт - уҡыусыларым зарланмай. Әммә бер ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс күҙәтеүем бар: талантты, ниңәлер, үҙе тыуып үҫкән биләмә хужалары күтәрмәләргә ашыҡмай, ә саҡ ҡына ситкәрәк китһә, ундайҙарҙы шундуҡ ҡәҙерләйҙәр...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

✓ *Улар киҫелгән урман урынына яңыһын ултыртыу түгел, туҙырап ятып ҡалған ботаҡ-һатаҡтарҙы йыйыштырып китеү хаҡында ла уйламай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАЙҺЫ САҠТА...

## илау ҙа яҡшы

■ Британияның St.Tropez косметик фирмаһы хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һуң йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Шаршамбы 15.00-16.00 сәғәткә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

■ Илау сәләмәтлек өсөн файҙалы, тип белдерә табиптар. Күҙ йәше илаусыларҙың хәлен күпкә яҡшыртырға мөмкинлек бирә, әммә бар нәмәлә лә сама кәрәк. Тик нисек "дөрөҫ" иларға һуң? Күҙ йәше менән организм үҙен ауыртыу һәм стрестарҙан ҡотҡара. Әгәр ҙә кеше тойғоларын сығармай һәм күҙ йәштәренә ирек бирмәй икән, был тиҙ ҡуҙғып барыусанлыҡҡа, ярһыусанлыҡҡа килтерә. "Эмоциональ көсөргәнеш менән бергә организмда химик матдәләр ҙә үҫешә һәм күҙ йәштәре менән бергә сыға. Әгәр ҙә көсөргәнеш менән көрәшмәһәң, был йөрәк өйәнәге хәүефен арттыра, баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәренә зыян килтерә", - ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Уильям Фрэй. Статистикаға ярашлы, илап алғандан һуң кешеләрҙең 88, 8 процентының хәле күпкә яҡшыра. Күҙ йәштәрендә пролактин тигән гормон бар, ул эмоциональ көсөргәнеште юҡҡа сығара һәм иммунитетты нығыта. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа ирҙәргә ҡарағанда пролактин күберәк, ә ауырлы саҡта ул тағы ла күбәйә. Шулай итеп, илау - бик файҙалы. Тик йыш илау шулай уҡ дөрөҫ түгел. Эмоцияларҙы нормала тотоу өсөн аҙнаһына бер тапҡыр илап алыу ҙа етә.

■ Инглиз ғалимдары D витамины етешмәүе тиҙ ҡартайыуға килтерә, тип иҫбатлай. Улар фекеренсә, D витамины дефициты һәр өсөнсө кешелә бар. Был витаминды "ҡояш витамины" тип йөрөтәләр, сөнки организм уның 90 процентын ҡояш тәьҫиренән ала. Шуға ла ҡояш аҫтында йышыраҡ булырға һәм D витаминына бай аҙыҡ-түлек ашарға (балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары) тырышырға кәрәк. Әгәр ҙә асыҡ һауала булғандан һуң тирегеҙ һиҙелерлек алһыуланһа, тимәк, организм 20000 ЕД D витаминына байыған. Тик нисек зыян килтермәҫлек итеп дөрөҫ ҡыҙынырға һуң? Тәүҙә ҡояшта 10 минут самаһы ғына ҡыҙынығыҙ һәм көн һайын был ваҡытты 1-2 минутҡа арттыра барығыҙ. Тап ошолай итеп ҡыҙынғанда ғына һаулыҡты нығытырға була. Бигерәк тә яҙғы ҡояш аҫтында һаҡ булығыҙ, был осорҙа тирегә бигерәк зыян килеүе бар. Шулай ҡояш нурҙары аҫтында оҙаҡ булыу тире яман шешенә килтереүе бар, онкологтар фекеренсә, солярийҙарға йөрөү ҙә тире яман шешенә килтерә. Ҡайһы бер үләндәр һәм дарыуҙар тиренең ҡояшҡа тәьҫирен көсәйтеүен оноторға ярамай. Был исемлеккә һары мәтрүшкә, йөрәк ауырыуҙарынан дарыуҙар (кордарон), бөйөр өҫтө биҙе гормондары инә.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**Чукоткала һәм Себерҙең ҡайһы бер өлкәләрендә йәшәүсе аҫаба халыҡҡа урман ҡырҡыу, һунар итеү, балыҡ тотоу һәм башҡа ғәмәлдәр рөхсәт ителгән, сөнки был шөғөлдәр уларҙың донъя көтөү һәм тамаҡ аҫрау ысулы тип танылған һәм теркәлгән. Ә беҙҙең ауылдарҙа йәшәгән башҡорттарҙың үҙ ер-һыуына ҡарата хоҡуҡи хәле эскимос, чукча һәм башҡа халыҡтарҙыҡынан күпкә мөшкөлөрәк.**

# ТАЛАНА БИТ...

## ата-бабалар төйәге



Барығыҙҙың да хәтерендәлер, моғайын, бынан тиҫтәләрсә йылдар элек һунар итеп йән аҫраусылар байтаҡ ине әле. Тейен, бүре аулауға хөкүмәт йөкләмәләре лә була торғайны. Өҫтәмә рәүештә шуны ла әйтеп үткем килә: һуғыш ваҡытында беҙҙең төп аҙығыбыҙ урманда үҫкән ҡаҡы, һарына, балтырған һ.б. үләндәр булды. Ә еләк-емеш тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Беҙ ул ваҡытта "химия" тигән нәмәне белмәй ҙә инек. Ә хәҙер?

Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, ерҙәребеҙ ниндәйҙер шикле Мәскәү фирмаларына ҡуртымға бирелде. Быға тиклем дә аяуһыҙ ҡырылған урмандарыбыҙҙы вәхшиҙәрсә таларға тотондолар. Хәҙер урмандан йорт һалырлыҡ түгел, һәнәк һапларлыҡ ағас алыу ҙа проблемаға әйләнде. Ә инде ҡайһы бер ауылдар халҡына, был шәхси урман, тип, еләк-емеш йыйыу ҙа тыйыла икән, тип ишетелә. Миҫал өсөн әллә ҡайҙа йыраҡҡа йөрөүҙең кәрәге юҡ. Беҙҙең Ишембай районының Эткол ауылынан алыҫ булмаған урындағы "Арҡы ялан"ды ғына атап үтеп китеү етәлер. Ул да бер Мәскәү олигархына ҡуртымға бирелгән һәм хәҙер халыҡ унда барып аяҡ та баҫа алмай.

Меңәр йылдар буйы тәбиғәт менән бер булып йәшәгән башҡорт уны хәстәрләргә лә, һаҡсыл ҡарарға ла күнеккән. Әммә хәҙер, барыбер яттарға ҡала, тигән күҙлектән сығып, ауыл кешеләре лә самаһыҙлыҡҡа юл ҡуя. "Хужалары алыҫта" тигән һылтау менән үҙ ерендәге тәбиғәт байлығын тәләфләй ҡай саҡта. Урмандар яна башлағас, ут һүндерергә әйҙәүселәргә халыҡ, был беҙҙең урман түгел, ана, хужалары һүндерһен, тип яуап бирә башланы һәм шул арҡала ер-һыу тағы ла ҙурыраҡ зыян күрә.

Әле булһа ла хәтеремдә уйылып ҡалған: беҙ, бәләкәй генә балалар, бөтә мәктәп менән ауылыбыҙ (Тирмән-йылға ауылы) янындағы баҫыуға сәселгән ашлыҡты сүптән утарға йөрөй торғайныҡ. Сөнки ул ваҡытта әлеге кеүек минераль ашламалар булманы. Ә хәҙер күп яландар шәхси хужалыҡҡа күскән, меңәрләгән гектар ерҙәрҙә сәселгән ҡарабойҙай, арыш һәм башҡа культуралы үҫемлектәр ҡар аҫтында ҡалып серергә мөмкин һәм бер кем дә үҙен ғәйепле итеп тоймаясаҡ. Ә бит бер ус ашлыҡты әрәм иткән йә ас ғаиләһенә алып ҡайтып ашатҡан өсөн төрмәгә ултыртҡан замандар ҙа булған.

Миҫал өсөн тағы бер ысынбарлыҡты яҙып үткем килә. Ишембай районының Эткол ауыл советына ҡараған Аҙнай ауылы янында ғына Берғамыт һыу башы урынлашҡан. Һыу тәбиғи рәүештә урғылып сығып ағып ята бында. Тик ул тәбиғәт байлығы ишембайҙар файҙаһы өсөн түгел, башлыса стәрлетамаҡтар өсөн ҡулланыла. Стәрлетамаҡ халҡы был һыу өсөн күпме түләйҙер, белмәйем. Ә инде һыу сығанағы янында ғына йәшәгән Аҙнай халҡы был һыуҙы тотонған өсөн ауыл советы ҡаҙнаһына аҡса түләй. Бына шундай парадокс.

Хөкүмәттең уйламай үткәргән мәғәнәһеҙ сәйәсәте арҡаһында халыҡтың ергә хужаларса ҡарашы юҡҡа сыға бара шулай. Ер-әсә тигән изге төшөнсәнең мәғәнәһе юғала, кешеләр ҡамғаҡҡа әйләнә. Ситтән килгән, ҡағыҙҙа матур итеп "инвестор" тип аталған әҙәмдәрҙең беҙҙең ерҙәрҙең, тәбиғәтебеҙҙең торошонда ҡайғыһы юҡ, улар мөмкин тиклем йәһәтерәк табыш алырға ғына ынтыла. Улар киҫелгән урман урынына яңыһын ултыртыу түгел, туҙырап ятып ҡалған ботаҡ-һатаҡтарҙы йыйыштырып китеү хаҡында ла уйламай. Һәр бер ағасы иҫәпле Европа менән сағыштырғанда, Уралтауыбыҙ буйҙарының хәле үтә лә аяныс һымаҡ тойола беҙгә.

Ябай халыҡ ата-бабаларыбыҙ меңәр йылдар шөғөлләнеп йән аҫраған, йәшәү рәүешенең нигеҙен хасил иткән һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ кеүек шөғөлдәр менән булыша алмай бөгөн. Ул шөғөлдәр хәҙер айырым кешеләргә һәм... күңел асырға яратҡан түрәләргә генә рөхсәт ителә. Шул уҡ ваҡытта урмандарыбыҙҙа, хатта ҡурсаулыҡтарҙа законһыҙ аусылыҡ , һунарсылыҡ сәскә ата. Бынан бер нисә йыл элек Урал арьяғы райондарының береһендә булырға тура килде. Ҡурсаулыҡта кардон ҡарауылсыһы булып эшләгән бер егет менән һөйләшеп торҙоҡ. "Тырышып, һәр тереклек өсөн йән атып тороуҙан ниндәй файҙа? Хужаларыбыҙға аҡса түләп, текә машиналарға тейәлеп, Орск, Ырымбур, Магнитогорск байҙары килеп төшә лә, ҡурсаулыҡта рәхәтләнеп һунар итәләр", - тигәйне ул йәне әсеп.

Һәр ваҡыттағыса, Рәсәй парадокстар төйәге булып ҡала килә. Унар, йөҙәр километрҙар майҙандағы законһыҙ ҡырҡылған һәм һатылған ағастар өсөн бер кем дә яуап бирмәй. Бер кем күрмәй ҙә, белмәй ҙә. Ә балаһын ҡыуандырыр өсөн Яңы йыл алдынан бер шыршы ҡырҡып тотолған ябай кешеләрҙе хөкөм итеп, "ҙур эш башҡарып", премиялар аласаҡ әле закон һаҡсылары. Хоҡуҡтарыбыҙҙы һәм закондарҙы ныҡлап белеп бөтмәүебеҙ ҙә хәлде ҡатмарлаштыра шул. Ул хоҡуҡтарҙы даулап йөрөүселәр булмағас, ҡул ҡаушырып ултырғас, еребеҙҙе лә, тәбиғәт байлыҡтарыбыҙҙы ла, йәнебеҙҙе лә талайҙар ғына.

Ер - беҙҙең иң ҙур байлығыбыҙ. Аҫаба хоҡуҡтарын законлаштыра алған, һалым һәм башҡа төрлө түләүҙәрҙән азат Америка индеецтары йәки милли кәсепкә индерелгән һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ менән тыныс шөғөлләнә алған Алыҫ Көнсығыш халыҡтары менән сағыштырғанда, беҙҙең декларация менән нығытылған суверенитетыбыҙ юридик яҡтан көслөрәк документ булып күренһә лә, ғәмәлдә, эштәр бөтөнләй башҡасараҡ тора. Сәхнәләрҙән "Уралым" тип өҙөлөп йырлап тороуҙың мәғәнәһе лә ҡалмағандыр, ахырыһы, хәҙер. Был йырҙа бына ниндәй һүҙҙәр бар:

*Күгәреп тә генә ятҡан Урал тауы -*
*Атай-олатайҙарҙың шул төйәге.*
*Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған,*
*Шунда ята батырҙар һөйәге.*

Урал тауының үҙ төйәге булыуын атай-олатайҙар аңлаған шул ул. Уны батшаларға һәм башҡаларға ла аңлата алған. Ә беҙ быны үҙебеҙ ҙә аңламайбыҙ, башҡаларға ла аңлата алмайбыҙ. Бабич әйткәнсә инде һаман да: "Тупраҡ китһә, бөләбеҙ..."

**Рәфҡәт СӘҒӘҘИЕВ.**
**Ишембай ҡалаһы.**

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА...*

# УМЫРЗАЯ СӘСКӘ АТА,

## йәки Тәбиғәтте кем бысрата?

**Ҡарҙы тишеп, тәбиғәткә йәм өҫтәп, тәүге умырзая сәскәһе ҡалҡа... Ә тирә-яҡ сүп-сар өйөмө менән тулған... Сәскә һәм сүплек. Матурлыҡ һәм вәхшилек хөкөм һөрә ерҙә.**

Эйе, сүп-сар тураһында күп яҙыла, күп һөйләнә. Әммә хәлдәр элеккесә ҡала килә. Яҙ етеп, ер ҡарҙан әрселә башлау менән ҡыш буйы йыйылып ятҡан сүп-сар өҫкә ҡалҡып, эсте бошора. Ҡарап тороуы аяныс хатта!

Урамда ғына түгел, урман-ҡырҙарыбыҙ, күл-йылға буйҙарыбыҙ бысраныуы, сүп-сар менән ҡапланыуы күптән инде етди мәсьәләгә әйләнде. Һыра шешәләренән башлап, полиэтилен ҡаптары, сепрәк-сапраҡ, балалар памперстарынан хасил был өйөмдәр. Һәр кем ошо үҙе ҡулланған нәмәләрҙе тейешле урынға ғына ташлаһа, бындай тәртипһеҙлек булмаҫ ине лә бит. Бөгөнгө халыҡтың аңына "Йыйыштырған урында түгел, сүпләмәгән урында таҙа" тигән хәҡиҡәт һеңдерелмәгән шул...

Элегерәк, беҙ бәләкәй саҡтарҙа, әллә тәртип башҡасараҡ, әллә магазин кәштәләре ярлыраҡ булдымы икән? Әммә ул тиклем үк өйөлөп ятҡан сүп-сар булманы шикелле. Булғанын да ололар йә яндырып, йә соҡорға күмеп бөтә ине. Әллә ниҙә бер килеп сыҡҡан кәнсир һауыттар, һауыт-һаба ярсыҡтарын, беҙ, балалар, уйната инек. Уйнатып туйғандан һуң да ташлап ҡуйманыҡ, бер генә урында өйөүле тора, кәрәге бөткәс, сүп өйөмөнә ташлана ине.

Урамға сығаһың да сүп-сарҙың күплеген күреп, эсең бошоп ҡайтып китәһең. Ярай әле, йыл һайын район-ҡалалар буйынса экологик өмәләр үтеп тора. Тирә-яҡ мөхитебеҙ йыйнаҡ, тәртиптә булһа, йәшәүе лә күңеллерәк булыр ине. Тәбиғәтте изге йортобоҙ кеүек күрәйек, йәмәғәт! Бысратыуға юл ҡуймайыҡ, тип кенә саҡырмаҡсы инем дә. Бәлки, берәйһенең ҡолағына инер һүҙҙәрем...

**Зәйтүнә ТИМЕРЙӘН.**
**Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы.**

*ҺАБАҠТАР*

# ҮСЛЕЛӘР...

## күңел тыныслығы тапмай

**Бер танышым тиктәҫкә генә үҙенең балалыҡ дуҫына үпкәләне лә ҡуйҙы. Бер кемдең өгөтөнә лә, кәңәшенә лә ҡолаҡ һалмай, эргә-тирәһендәгеләрен, яҡындарын ғәжәпкә һалып, туғанлашып бөткән ғүмерлек әхирәте менән аралашыуҙан баш тартты.**

Иң ҡыҙығы шунда: бер урамда уйнап, бер парта артында ултырып уҡыған дуҫы уның был ҡылығын бер нисек тә аңлата алмай. "Аңғармайынса берәй яңылышлыҡ, хата ҡылған булһам, ғәфү ит", - тип, эшләмәгән хатаһы өсөн кисереүен үтенеп, баш эйеп тә барған ул. Тик әхирәте береһенән-береһе яман һүҙҙәр әйтеп, тупһаһы аша ла үткәрмәй, ишеген шарт ябып ҡалған. "Һин миңе яҡшы беләһең, мин барыбер былай ғына ҡалдырмайым, үс аласаҡмын!" тип янаған да хатта.

Аралашмауҙарына хәҙер туғыҙ-ун йыллап барҙыр инде. Береһе йөрөгән ҡунаҡҡа икенсеһе йөрөмәне, урамда осрашһалар, урап үттеләр. Шулай ҙа бер саҡ, урамда икәүҙән-икәү осрашҡанда яғаһынан алып ҡурҡыттым тегене, тип маһайып һөйләгәне лә хәтерҙә танышымдың. Был һүҙе дөрөҫтөрмө-юҡтырмы, әммә береһенән-береһе матур, уңышлы, бәхетле ике ҡатындың яғалашып тороуын күҙ алдына килтереүе ҡыйын ғына түгел, ытырғаныс хатта.

Асыулы ваҡытта кеше ни әйтмәҫ, тип, үс алам, тип янауын әхирәте ысынға алмай. Эшенә, өйөнә шылтыратып йәберләүенә, ҡултамға ҡуйылмаған хаттар килеүенә лә тәүҙә иғтибар итмәй. Уның артында кем тороуын белә бит инде. Үҙе тураһында таратҡан имеш-мимештәргә лә артыҡ әһәмиәт бирмәй. Туҡталыштарға эленгән, гәзит биттәрендә баҫылған "арзанға ғына йорт һатам", "мебелдәремде, кейемдәремде бушҡа бирәм" кеүек иғландар буйынса шылтырата башлағастар ғына йыл буйы үҙенең һәм ғаиләһенең ниндәй баҫым аҫтында йәшәүен аңланы ҡатын, сөнки ҡала эсендәге бынамын тигән йортто арзанға ғына, өй йыһаздарын иһә бөтөнләй бушҡа алырға теләүселәр артҡандан-артты.

Әхирәте исеме, имзаһы ҡуйылмаған хаттарҙы, запискаларҙы, туҡталыштағы, гәзиттәге иғландарҙы - элекке әхирәтенең яуызлығына, этлегенә дәлилдәрҙе тотоп, үҙенә бара һәм тағы ла шуға оҡшаш хәл булһа, судҡа барасағы тураһында әйтә. Шул ваҡиғанан һуң ҡултамғаһыҙ хаттар, танышырға теләйем, һатам, һатып алам тигән ялған иғландар буйынса шылтыратыуҙар, ысынлап та, туҡтай. Бер аҙҙан иһә, әмәлгә ҡалғандай, был ғаилә бөтөнләй икенсе ҡалаға күсеп китте.

Шул уҡ ваҡытта танышым үс алыу теләге менән йәшәүен дауам итте. Элекке әхирәте уртаҡ таныш булғанға күрә, был хаҡта асыҡтан-асыҡ бер нәмә лә һөйләмәне, әммә уның исемен ишетеү менән йөҙө ҡара янды. Әхирәтенең берәй етешһеҙлеге, кәмселеге йәки ниндәй ҙә булһа эше, ниәте килеп сыҡмағанлығы тураһында һөйләһәләр, йотлоғоп тыңланы, ә уның яҡшылығы, йомартлығы, изге күңелле булыуы, үҙенең, иренең, балаларының уңышы хаҡында бәйән иткән кешенең ауыҙын нисек ябырға белмәне, дошманы кеүек күрҙе. Нисек кенә һораһаң да, ни өсөн ҡасандыр йән дуҫы булған, шатлығы ла, ҡайғыһы ла уртаҡ яҡын кешеһенә ни сәбәпле үпкәләүен, үс тотоуын һөйләмәне үҙе.

...Күптән күргәнем юҡ ине уны. Байрам алдынан урамда осраны. Һылыу йөҙө ҡарайып, һурылған, тулы кәүҙәһе лә ябығып, ҡураныс ҡына булып ҡалған. Яңы ғына йөрәк өйәнәге менән дауаханала ятып сыҡҡан икән.

Психологтар билдәләүенсә, үс алыу тойғоһона, ғәҙәттә, көсһөҙ, үпкәсел, тормошо, эше, эргә-тирәһендәгеләре менән ҡәнәғәт булмаған, үҙен түбән баһалаған кешеләр дусар була. Әммә танышымды ундайҙар рәтенә индереп булмай: ғаиләһен, эшен яратҡан, үҙенә ныҡ ышанған, ҡыйғас ҡашлы, көр күңелле, һылыу ҡатын ул.

Үс алыу теләге яратыу, һөйөү тойғоһо кеүек үк кешене бик көслө хис, эмоция кисерергә мәжбүр итә, тиҙәр. Әгәр мөхәббәт тормошобоҙға шатлыҡ-ҡыуаныс, наҙ, йылылыҡ, яҡтылыҡ өҫтәһә, үс алыу тойғоһо, киреһенсә, яуызлыҡ, кире хистәр сығанағы булып тора. Үс алыу теләге менән янған кеше бер ҡасан да тынғылыҡ тапмай, был тойғо уны бәхетле булырға, уңышҡа ынтылырға ҡамасаулай, яҡты уйҙар, хыялдар менән йәшәргә кәртә ҡуя.

Үрҙә телгә алған танышым да әхирәтенән нисек тә булһа үс алыуҙы төп маҡсат итеп ҡуйып, үҙе лә һиҙмәҫтән, башҡа изге ниәттәрен, хыялдарын икенсе планға күсерҙе. Көндәр-төндәр буйы яуызлыҡ, хөсөт тураһында ғына уйлап йәшәгән көйһөҙ, тиҙ ҡуҙғыусан ҡатынға хәләл ефетенең дә, балаларының да мөнәсәбәте үҙгәрҙе, тиҙҙән бөтөнләй ситләште, өҫтәүенә врачтар йөрәк ауырыуы тапты. Үс алыу тойғоһо организмға ҙур зыян килтергәнен белһә, үсләшеү теләге менән йәшәр инеме икән танышым? Юҡтыр, моғайын. "Врачтар, йәшәйһең әле, тип ышандыралар ҙа ул..."- танышымдың тауышында өмөтһөҙлөк, иртәгәһе көнөнә ышанмаусанлыҡ тойғоһо сағылды. Шунан ҡапыл ғына баяғы әхирәте тураһында һораны. Уның хаҡында күптән бер нәмә лә ишеткәнем булмауы тураһында әйткәс, "Тимәк, барыһы ла яҡшы, шулай булһын инде", тине лә уфтаныбыраҡ ҡуйҙы...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Үлем ҡойма ямғырҙа һөжүм итә

Ун саҡырым да китеп өлгөрмәнек, көтмәгәндә күк йөҙө ҡараңғыланып, автомобиль ҡойма ямғыр аҫтында ҡалды. Ямғыр шул тиклем көслө ине, хатта алғы тәҙрәләрҙәге "дворник"тар бер урында "буксовать" итте. Водитель менән юл һыҙатының һул яғына, Аҫҡын трактына боролошто үтеп китмәйек, тип, көсөргәнеп ҡарап барҙыҡ. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң машинаның кәрәкле маршруттан сыҡҡанын аңланыҡ. Инаныу өсөн тағы тиҫтә самаһы километр үтергә һәм боролорға булдыҡ. Шул уҡ ваҡытта ҡойма ямғыр ҡапыл туҡтаны, әйтерһең дә, кемдер күктәге "кранды" ябып ҡуйҙы. Ике-өс саҡырым самаһы үткәс, текә ҡаяны күрҙек: бында юл сағыштырмаса күптән түгел генә эшләнгәйне. Уңға ҡарап, һыу сығанағының һөҙәк ярында "Золотарев ҡултығы" тигән яҙыуҙы күрҙем. Ниһайәт, ҡайҙа булыуыбыҙҙы аңланым. Был Ҡариҙел ауылына ингән урын ине.

Яҡында ғына бер нисә кеше юл ыңғайы осраған транспорт көтә. Ныҡлап ышаныр өсөн машинанан сығып, юлдың ҡайҙа алып барыуын һораным. Минең шигем раҫланды - беҙ Ҡариҙелдә инек. Тимәк, Аҫҡынға юл күрһәткесте күрмәгәнбеҙ һәм уны уҙып киткәнбеҙ. Хәҙер сама менән 40 саҡырым тирәһе кирегә китергә кәрәк. Мин быға бик көймәнем, ваҡыт етерлек ине. Бары тик һауа торошона иғтибар иттем. Күк болотло, еләҫ ел иҫә. Әммә ер ҡоп-ҡоро. Аптырап, башымды сайҡап, машинаға инеп ултырҙым һәм кирегә боролдоҡ.

Ун минут та барманыҡ, беҙгә тағы ла күк шарлауығы ҡойолдо. Көслө ел иҫте, ваҡыты-ваҡыты менән автомобилдең уң яғы ерҙән еңелсә генә айырылып-айырылып алыуын тойҙом. Водитель барыһынан да нығыраҡ ҡаршы яҡтан килеүсе транспорт сараһына бәрелеүҙән хафаланды. Автомобилдең мороно ла күренмәгән көслө ямғырҙы мин быға тиклем бер тапҡыр ғына күргәйнем. Әммә ул ваҡытта беҙ юлдың ситенә сығып, ҡойма ямғыр тымғанын көтөп ултырғайныҡ. Әлеге ваҡыттың үҙенсәлеге нимәлә ине - беҙгә туҡтарға ярамай.

